✓ *Әсәһенең иң яратҡан балаһы булған кеше ғүмере буйына үҙен еңеүсе итеп тоя һәм уңышҡа ышаныс менән йәшәй. Йыш ҡына был тойғо уны ысынлап та ҙур уңышҡа алып килә.*

*(Зигмунд Фрейд).*


ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

1 - 7 ОКТЯБРЬ (ҠАРАСАЙ) 2011 ЙЫЛ

kiskeufa.ru
blog.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

№40 (458)


## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:


### Рәсәй бүлгеләп хакимлыҡ итә...

Беҙ берләшеп тантана итәйек!



7

### Абруй яулауға...

кешелеклелек аша өлгәшелә



8-9

### Мода батшалығында...

башҡорт ҡыҙҙарының үҙ тәхете



11

### Кескәй йөрәктәрҙең...

әсәй өсөн өҙгөләнгәне



12

14 ТВ-программа


ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Дәүләтебеҙ бөгөн илдең төп хеҙмәт ресурсы булған йәштәргә ҡарағанда карттарыбыҙ тураһында күберәк хәстәрлек күрә һымаҡ. Ғөмүмән, карттар һәм йәштәр араһындағы үҙ-ара мөнәсәбәт, уларға йәмғиәтебеҙҙәге ҡараш тураһында ни әйтерһегеҙ?

***Ләйлә САБИТОВА, журналист:*** Ысынлап та, ҡарттар һәм балалар йәмғиәттең иң яҡлауһыҙ вәкилдәре, тип иҫәпләнә, шуғалыр ҙа хөкүмәт тарафынан балалыҡты яҡлау буйынса ла, оло кешенең социаль статусын күтәреү йәһәтенән дә күп эштәр башҡарыла. Беҙҙә ололарға хөрмәт һәм дан, ололар алдында ауыҙыңды асма, улар һәр ваҡыт хаҡлы, дөрөҫлөк һәм нахаҡ тураһында ла улар ғына фекер йөрөтә ала. Бер яҡтан, ололарҙы тыңлау яҡшы, был быуындар бәйләнешенең тотороҡлоғона, рухи һәм матди ҡиммәттәрҙең тәбиғи күсәгилешлегенә булышлыҡ итә. Шул уҡ ваҡытта, бер олоно, бер кесене тыңла, ти халыҡ. Ә беҙ нимә? Беҙ парадокстар илендә йәшәбеҙ һәм эшләйбеҙ. Тәү күҙлектән йәштәр өсөн барыһы ла эшләнә кеүек, һәр хәлдә, трибуналарҙан был турала көн дә һөйләнелә. Гранттар тапшырыла, аҡса бүленә, стажировкаларға ебәрелә. Ысынында иһә, быларҙың барыһы ла ҡағыҙҙа ғына. Йәштәр, йәштәр, тиҙәр ҙә, ҡарттар барыбер үҙенсә эшләй. Фәндә лә, мәҙәниәттә лә, сәйәсәттә лә йәштәр манекен ролен үтәй. Уларҙың ултырыр урыны бар ҙа, тауышы юҡ. Ҡайҙа, ниндәй осраҡта йәштәр теге йәки был ваҡиғаны үҙ файҙаһына борғаны бар? Ә элек бит 16-20 йәшлектәр революция яһаған, үҙ ҡаны менән азатлыҡ даулаған. Шәйехзада Бабич, Әхмәтзәки Вәлиди, Муса Мортазин, Шәһит Хоҙайбирҙиндарҙы әйтәм.

Әлбиттә, беҙҙә, йәштәрҙә лә ғәйеп бар. Инфантиллек, матди, профессиональ яҡтан үтә һуң өлгәреү, утыҙға еткәнсе атай-әсәй итәгенә йәбешеп барыу, ғаилә ҡороу мәсьәләһен аҙаҡҡа ҡалдырыу... Шулай итеп, бында ҡарттар ҙа, йәштәр ҙә берҙәй ғәйепле. Берәһе, үтә йәш, һөйәге мурт, тип, яуаплы эш ҡушмай. Икенсеһе яуаплылыҡтан ҡурҡа, сөнки етди эшкә тотонғаны юҡ. Ҡарттар йәштәрҙән ҡурҡмай ғына үҙҙәренә алмаш үҫтерһә ине. Шунһыҙ бер ҡасан да алға китмәйәсәкбеҙ. Көлкө, беҙҙең йәмғиәттә 40 йәшкәсә кеше йәш иҫәпләнә. Уларҙы ололар, маҡтарға теләһә, "Шәп малай", "Матур ғына ҡыҙыҡай" тип ебәрә. Ҡырҡ йәштәгеләре лә йәш иҫәпләнгән йәмғиәт ниндәйҙер табыштарға, оло асыштарға дәғүә итә аламы?

***Рәүеф БИКТАШЕВ, хаҡлы ялдағы уҡытыусы:*** Әгәр ҙә йәмғиәттә ҡарттар һәм йәштәр мәсьәләһе буйынса ниндәйҙер социаль проблемалар бар икән, бында әхлаҡи ҡиммәттәрҙең юғалыуы, традицион ғаилә ҡоролошоноң йайлап емерелә барыуы ла ғәйепле. Хөкүмәт матди хәлде генә яҡшырта һәм хәл итә ала, ә ҡалған проблемалар тап ана шул әхлаҡһыҙлыҡтан килеп тыуа. Оло кешегә пенсияны етерлек түләйҙәр, ә унын күңел бөтөнлөгөн тәьмин итеүсе башҡа шарттар хөкүмәт ҡулында түгел. Етем ҡарттар, етем балалар бар икән, уларҙың күбеһе социаль етемдәр, бының нигеҙендә тағы ла ана шул әхлаҡһыҙлыҡ ята түгелме һуң? Академик Д. Лихачев ҡасандыр, мәҙәниәткә күберәк иғтибар бирергә кәрәк, тигәйне, миненсә, иң тәүҙә әхлаҡ нормаларын үҫтерергә кәрәк. Шул саҡта балалар ҙа, ҡарттар ҙа ҡараулы буласаҡ, улар араһында мөнәсәбәттәр ҡырҡыулығы килеп тыумаясаҡ, йәштәр ғаилә ҡороуҙан ҡасмаясаҡ.

Хәҙерге йәштәрҙең, ысынлап та, матди хәле еңел түгел, бөгөн улар үҙ-үҙҙәренә тапшырылған. Заманса шарттарҙа йәштәрҙең социаль проблемалары һәр кешенең һәм, әлбиттә, дәүләттең дөйөм проблемалары менән бергә ҡушылып, нисектер, артҡы планға күсә килә кеүек. Беҙ йәш саҡта, исмаһам, белем алырға мөмкинлек булды. Стипендия ла байтаҡ ҡына түләнде, эшләп тә йөрөнөк. Хәҙерге заманда юғары белем алыусылар күберәк, әммә дипломлы белгестең бөгөн күбеһе эшһеҙ, әллә һөнәрҙе дөрөҫ һайламайҙар, әллә башҡа сәбәптәре бар. Үҙҙәре лә инициатива күрһәтеп бармай шул, ауылда ла, эш юҡ, ти ҙә ултыралар. Кемдәндер әйткәнен көтмәй ултырыусылар ҙа бар бит араларында. Мәҫәлән, быйыл беҙҙең ауылда 5 фермер барлыҡҡа килде, иген сәстеләр. Ситкә китеп эшләүселәр, уңмайынса, кире ҡайтыусылар бар. Әгәр үҙең тырыш булмаһаң, әллә ниндәй закондар ҡабул ителмәһен, әллә ниндәй ярҙам күрһәтелмәһен - хәл ыңғай яҡҡа үҙгәрмәйәсәк.

**(Дауамы 2-се биттә).**

ТУҠТА, МӘЛ!



Беҙҙәк районы Ҡаңны-Төркәй ауылы ҡарттары ла "Киске Өфө" уҡый.

## ЙӘҮКӘ ТЕЛЕФОН




### Кем күпмегә кәмегән?

Азамат Моратовтың телевидение аша алып барған "Үлсәү" реалити-шоу программаһы быйыл республикабыҙҙа ҙур популярлыҡ яуланы. 2-3 аҙна эсендә 20-30 килограмға ябығыуҙың кеше һаулығы өсөн ниндәй ҙур файҙа килтереүе хаҡында уйлап ҡына ҡарағыҙ! Америкала ваҡытһыҙ вафат булыусы һәр өс кешенең берәүһе артыҡ ауырлыҡ арҡаһында яҡты донъя менән хушлашыуын иҫәпкә алғанда, был проблема киләсәктә беҙҙең өсөн дә актуаль булыры көн кеүек асыҡ. Сөнки, йәмәғәт, һимерәбеҙ. Компьютер һәм "тилейәшник" алдында күп ултырабыҙ, аҙ хәрәкәтләнәбеҙ, дөрөҫ туҡланмайбыҙ, һ.б.

Тағы ла шуныһы: беҙ һәр бер яңылыҡты кампанияға әүерелдереп ебәрергә әҙер торабыҙ. Мәҫәлән, Азаматтың кешене ябыҡтырыу буйынса башлаған ошо изге башланғыһына республикабыҙҙың тотош бер ауыл халҡы ҡушылыуы хаҡындағы мәғлүмәт "Йәүкә телефон" агентлығына мәғлүм булды. 540 кеше йәшәгән был ауыл халҡы реалити-шоуға ҡушылып, 3 аҙна эсендә барлығы 1 тоннаға кәмегән икән. Сенсацияға торорлоҡ яңылыҡ был, йәмәғәт. Билдәле сәбәптәр буйынса ауылдың исемен әлегә әйтмәй торорға булдыҡ.

Әйткәндәй, Өфөнөң "ҡар кешеһе" Анатолий Легкотаның кәүҙә ауырлығын кәметеү, ябығыу мәсьәләһенә үҙ ҡараш-концепцияһы бар. "Йәүкә телефон" агентлығы хәбәрселәренә ул был хаҡта шулай тип белдерҙе: "Ябығыу буйынса әллә күпме хеҙмәт яҙыла, тотош институттарҙа быуын-быуын ғалимдар ошо мәсьәлә өҫтөндә эшләй. Минеңсә, бында бер ниндәй институт та, реалити-шоу ҙа, махсус тренингтар ҙа, программалар ҙа кәрәкмәй. Ябығыуҙың иң дөрөҫ программаһы өс кенә һүҙҙән тора: Әҙерәк ашарға кәрәк!"

### Тибелеп килгәндәр...

"Йәүкә телефон" агентлығы офисына яңыраҡ бер-бер артлы Учалы һәм Ишембай районрдарынан телефондан шылтыратҡандар. Телефон сымының теге осонда торосыларҙың һәр ҡайһыһы Әҙәм менән Һауаның ожмахтан ергә һөрөлгәндән һуң үҙҙәренең район территорияһына килеп төшөүен һәм шунда йәшәй башлауын иҫбатларға тырышҡан. Агентлыҡ журналистарының "Был фаразығыҙҙы һеҙ нисек иҫбатлай алаһығыҙ?" тигән һорауына ике төбәк шылтыратыусылары ла дәлилдәрен "типтәр" атамаһы менән нығытҡан. Йәнәһе, Әҙәм менән Һауа гонаһ ҡылғандары, йәғни тыйылған "ләззәт алмаларын" татығандары өсөн ожмахтан ергә тибелеп килгән, имеш. Үәт әй!

**Әмир ҒҮМӘРОВ яҙып алды.**

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

### *Дәүләтебеҙ бөгөн илдең төп хеҙмәт ресурсы булған йәштәргә ҡарағанда ҡарттарыбыҙ тураһында күберәк хәстәрлек күрә һымаҡ. Ғөмүмән, ҡарттар һәм йәштәр араһындағы үҙ-ара мөнәсәбәт, уларға йәмғиәтебеҙҙәге ҡараш тураһында ни әйтерһегеҙ?*

(Башы 1-се биттә).

***Сания АРЫҪЛАНБАЕВА, пенсиялағы уҡытыусы:*** Ҡыҙыҡ ҡына хәл килеп тыуҙы шул: бөгөн ауылдарҙа иң аҡсалы кешеләр - улар ҡарттар. Ә донъяны алға алып барырға, нәҫелде дауам итергә, ауылды йәшәтергә, мәктәпте балалар менән тәьмин итергә тейешле йәштәр эшһеҙ һәм ашһыҙ, ғаиләһеҙ. Ни эшләргә белмәгәнлектән, баштарын эскегә тығалар, шул уҡ ҡарттар иҫәбенә йәшәйҙәр. Йәштәре әрәмтамаҡ булған йәмғиәтебеҙҙең киләсәге ҡурҡыта мине. Шуға ла дәүләт үҙ сәйәсәтен ҡырҡа үҙгәртергә, иң тәүҙә балалар һәм йәштәр тураһында хәстәрлек күрергә тейеш. Был ҡарттар тураһында хәстәрләмәҫкә кәрәк, тигәнде аңлатмай. Ҡарттарыбыҙ үҙенең намыҫлы һәм фиҙаҡәр хеҙмәте менән үҙ-үҙен ғүмер ахырынаса тәьмин иткән инде. Һәр хәлдә, уның астан үлмәҫлек пенсияһын берәү ҙә кире тартып алмаясаҡ. Ә инде ул бик насар йәшәй, балаларынан ҡәҙер-хөрмәт күрмәй, мохтажлыҡ кисерә икән, быныһына хөкүмәт тә, дәүләт тә, йәмғиәт тә түгел, бары тик ул үҙе генә ғәйепле: ҡартлығы тураһында алдан хәстәрләмәгән, балаларын тейешенсә тәрбиәләмәгән. Унан һуң, беҙ, ҡарттар, ҡайһы саҡта үтә холҡһоҙ ҙа булып китәбеҙ. Эш урыныбыҙҙы йәш кешегә бирә һалырға ашығып бармайбыҙ. Башҡа уңайлыҡтарҙы, төрлө баһаларҙы ла иң тәүҙә үҙебеҙгә юлләйбыҙ. Бына әле Дәүләт Думаһына депутаттар һайларға торабыҙ, кандидаттар исемлегендә лә пенсия йәшендәгеләр байтаҡ. Ә бит Дәүләт Думаһына йәштәребеҙ китһә, республика, ил һәм халыҡ өсөн, шулай уҡ үҙҙәре өсөн дә күберәк эшләрҙәр ине...

**Ләйсән НАФИҠОВА яҙып алды.**

## КЕМ АЛЫҠ!

# БҮЛӘККӘ - "ДИНИ КАЛЕНДАРЬ"



Ҡырмыҫҡалы районының башҡорт теле уҡытыусылары.

**Мөхтәрәм милләттәшебеҙ! Бына тағы һине лә, баҫмабыҙҙы ла, ошо баҫманы ижад итеүселәрҙе лә һынау мәле етте. Гәзитебеҙҙе уҡыусы милләттәш туған телдәге баҫманы ниндәй дәрәжәлә һанлай һәм баһалай? Уның үҙ милләтенә, туған теленә ҡарата аң, рух, ихтирамы ниндәй кимәлдә? Баҫмабыҙҙағы һүҙ ҡеүәһе, фекер үткерлеге уның күңелен арбай, сәмен һәм ғәмен уята алырлыҡмы?**

Бына шулай, **2012 йылдың беренсе яртыһына гәзитебеҙгә яҙылыу башланыуын иғлан итеп**, уҡыусыбыҙ һәм үҙебеҙ алдына ошо һорауҙарҙы ҡуябыҙ. Һәр ваҡыттағыса, уҡыусыны ылыҡтырыр вәғәҙәләребеҙ ҙә бар: күп һорауҙарығыҙға яуап бирер, ниндәйҙер ауырлыҡтарға юлыҡҡанда уларҙы еңер сара, борсолоуҙар мәлендә - йән тыныслығы, күңел төшөнкөлөгө булғанда - рухландырыр, сәмләндерер һүҙ әйтер матур йөкмәткеле баҫма аласаҡһығыҙ ҡулдарығыҙға.

**Бынан тыш**, әлбиттә, оптимистар өсөн **бүләктәр ҙә** булмай ҡалмаясаҡ. Оптимистар өсөн, тибеҙ, сөнки гәзитебеҙгә яҙылыу тураһындағы квитанцияларҙың "Мин барыбер бүләкһеҙ ҡалмайым!" тигән кешеләрҙән генә килеүен яҡшы беләбеҙ. "Киске Өфө"нө уҡыусыларҙың барыһының да оптимист булыуын теләйбеҙ, уларҙың ошондай сифаттарын уятыуҙы маҡсат итеп ҡуябыҙ. **Ә сентябрь айында гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргән 30 кешегә 2012 йыл өсөн "Дини календарь" ебәрәбеҙ.**

**Әйткәндәй**, кемде бүләктәр ҡыҙыҡһындырмай, улар беҙгә **тыуған көндәрен** хәбәр итһен. Гәзитебеҙ аша гәзит уҡыусыбыҙҙы тыуған көнө менән ҡотлау - беҙгә лә мәртәбә, һеҙгә лә шатлыҡ өҫтөнә шатлыҡ өҫтәр.

**"Киске Өфө" - бүләгем" акцияһы ла дауам итә.** Уға ҡушылып, ауылдарҙағы туғандарығыҙға, ата-әсәйҙәргә, мәсеттәргә, таныштарығыҙға гәзитебеҙҙе яҙҙырып шатландырығыҙ.

**Шулай итеп**, 2012 йылдың тәүге яртыһына гәзитебеҙҙең 50665 индекслыһына **348 һум 24 тингә**, 50673 индекслыһына (юридик шәхестәр өсөн) **378 һум 24 тингә** яҙыла алаһығыҙ.

Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**. Беҙҙең электрон почта: **info@kiskeufa.ru**. Беҙҙең блог: **blog. kiskeufa.ru**.

**Бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ, донъя хәтәрҙәрен, борсолоуҙарҙы бергә еңәйек, шатлыҡ-ҡыуаныстарҙы бергә уртаҡлашайыҡ!**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓ Республикала пенсионерҙарҙың йәшәү кимәле буйынса социологик тикшеренеү үткәрелә. Шулай уҡ БР Хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрлығы әлеге ваҡытта социаль поликлиникалар булдырыу менән мәшғүл. Улар социаль хеҙмәткәрҙәр, юристар, психологтар, шулай уҡ Пенсия фонды һәм башҡа ведомстволар вәкилдәренән торған махсус бригадалар булдырырға уйлай. Бригада белгестәре алыҫтағы ауылдарға сығып, халыҡҡа төрлө консультациялар бирмәксе. Әлеге ваҡытта төбәктә яҡынса 800 мең оло йәштәге кеше иҫәпләнә, уларҙың 74 проценты - ҡатын-ҡыҙ. Шул уҡ ваҡытта республика ҡалаларында пенсионерҙарҙың 60 проценты, ауыл ерендә 40 проценты йәшәй.

✓ Быйыл ауыл хужалығы техникаһын һатып алыуҙы субсидиялау программаһы иҫәбенә республикала ауыл хужалығы етештереүселәре йәмғеһе 2,8 миллиард һумлыҡ 2500 техника берәмеге һатып алған. Был 600 самаһы трактор, 280 иген урыу комбайны, 70-ләгән мал аҙығы урыу техникаһы һәм башҡалар. Ауыл хужалығы техникаһы хаҡының 40 проценты тиерлек субсидияланған.

✓ Республика Хөкүмәте 90 йәштән олораҡ граждандарға матди ярҙам күрһәтеү тураһындағы ҡарарға ҡабул итте. Халыҡ-ара ололар көнөндә улар 800 һумлыҡ аҙыҡ-түлек йыйылмаһы алды. Был маҡсатҡа республика ҡаҙнаһынан ете миллион һумдан ашыу аҡса бүленде. Әлеге ваҡытта республикала 90 йәштән олораҡ 8500 кеше һәм йөҙ йәште үткән 203 кеше йәшәй.

✓ Рәсәй Юғары суды Ҡорбан һәм Ураҙа байрамдарында ял итеүҙе ҡануниәт сиктәренә һыймай, тигән ҡарар сығарғайны. Ошо көндәрҙә был ҡарарға ҡарата Башҡортостан Республикаһы Президенты ла, БР Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтай депутататтары ла, республика йәмәғәтселеге лә ҡырҡа ҡаршы сыҡты һәм Рәсәй Юғары судына был ҡарарҙы көсөнән сығарыу тураһында юлламалар ебәрҙе. Рәсәй Юғары суды Президиумы ялыу ҡаралғанға тиклем ул ҡарарҙы туҡтатып торорға ҡарар иткән. Әлегә ултырыш көнө билдәләнмәгән.

✓ Паралимпия уйындарының күп тапҡыр чемпионы Ирек Зарипов Елена Мухина исемендәге милли премияға "ИНВА-спорт" номинацияһында лайыҡ булды. Бөйөк гимнаст, 1978 йылда абсолют донъя чемпионы Елена Мухина исемендәге премия Рәсәй Паралимпия комитеты тарафынан булдырылған.

*МИЛЛИ ИДЕЯҒА ТОРОШ*

# ҠУЯНДЫ ЫСҠЫНДЫРМАЙЫМ, ТИҺӘҢ,

## этеңде ысҡындыр...

**Был әйтемде тура мәғәнәһендә тик бер төрлө итеп кенә аңлау уны үтә ябайлаштырып ҡарау һымаҡ аңлашылыр ине. Әлбиттә, һунарҙа саҡта ҡуянды ысҡындырмайым, тиһәң, этеңде бауҙан ысҡындырып ебәреп, ике аяҡлы дуҫыңдың һәлпеш ҡолаҡты ҡыуып еткәнен көтөп алаһың инде. Ул сағында әйтемдең әтнәкәһе лә ошо урында тамамланыр ине. Әммә был әйтемгә һалынған кинәйәне бар тулылығында тағата-һүтә башлаһаң, шундайын, хатта милли идеяға торош киң мәғәнәгә эйә фәлсәфәгә барып сығаһың. Әйтәйек, ошондайыраҡ мәғәнәгә эйә һығымтаға: "Үҙлегеңдән ҡуянлыҡты-ҡурҡаҡлыҡты ысҡындырмайым, йәғни үлгәнсе бахыр булып йәшәмәйем тиһәң, этеңде ысҡындырып, йәғни уҫаллығыңды күрһәтеп алаһың инде". Хәҙер инде "Ҡуянды ысҡындырмайым, тиһәң, этеңде ысҡындыр" әйтеме хаҡында ошо юҫыҡта фекер йөрөтәйек. Ҡуянды - ҡурҡаҡлыҡ, этте - уҫаллыҡ юҫығында.**



80-се йылдар башында "Комсомольская правда" гәзитендә (үкенескә ҡаршы, гәзиттең ул һанын, мәҡәләнең исемен, авторын һәм унда һүҙ барған кешенең исемен иҫләмәйем) илебеҙҙең бер ҡалаһында йәшәүсе йөрәккә операция яһаусы алтын ҡуллы табип хаҡында мәҡәлә баҫылғайны. Мәҡәләлә йөрәккә операция яһаусы табиптың төнөн өйөнә ҡайтып барғанда бер иҫерек кешене хаяһыҙ туҡмаусы хулигандарға ташланып, уларҙың бысағынан һәләк булыуы хаҡында һүҙ бара. Мәҡәлә авторы үҙ эшенең маһиры булған табиптың был батырлығы хаҡында шундайыраҡ фәлсәфәүи һығымта яһай: "Ә бит ул алтын ҡуллы табип иҫерек хәлдәге бер кешене ҡотҡарыу урынына йөрәккә ҡатмарлы операция яһап, тағы ла йөҙәрләгән кешеләрҙе үлемдән алып ҡала алыр ине..." Ҡыҫҡаһы, мәҡәлә авторы табиптың ошондай аңлайышһыҙ сыуалыштың уртаһына ташланып, үҙен ҡорбан итеүен батырлыҡҡа түгел, "ахмаҡлыҡҡа" тиңләй һәм һәр бер дәлилен ошо фекерен нарыҡлауға йүнәлтә. Әгәр ҙә ошо урында табип: "Минең йортом - ситтә" йә булмаһа "Бәләһенән баш-аяҡ", тигән принциптан сығып эш итһә, йәғни сыуалыш барған урынды урап үтһә, бәләгә тарыған кешене яңғыҙ ҡалдырһа, был осраҡта автор уны ниндәй дәлилдәр менән аҡлай алыр ине икән? "Ул иҫерек кеше туҡмалған урынды урап үтеп, һуңынан операция өҫтәлендә йөҙәрләгән ғүмерҙәрҙе ҡотҡарҙы", типме?

Эйе, ошо рәүешле ситтән тороп фекер йөрөтөүе генә рәхәт. Ситтән тороп батыр булып ҡыланыуы ғына рәхәт. Һәр беребеҙ үҙебеҙҙе ошо табип урынына ҡуйып ҡарайыҡ әле. Ваҡиғалар ағышы ниндәй йүнәлеш алыр ине икән? Шулай уҡ әйтеүе ҡыйын. Мәҡәлә авторы табиптың был һәләкәтле аҙымын "ахмаҡлыҡ" тип атаһа ла, беҙ уны Гиппократ антына ғына түгел, гуманизмдың иң юғары баҫҡысы булған намыҫ антына ла тоғро ҡалған ысын кеше, батыр йөрәкле шәхес итеп таныйбыҙ. Үкенескә ҡаршы, хәҙерге заманда күпселек тарафынан табиптың был ҡылығы шул уҡ ахмаҡлыҡ тип билдәләнер ине.

Атай-олатайҙарыбыҙҙың еребеҙ, телебеҙ, динебеҙ азатлығы өсөн йән аямай быуаттар буйына көрәшеүен дә хәҙерге көн күҙлегенән генә ҡарап фекер йөрөтөүселәр бар. Ундайҙар хатта үҙебеҙҙең милләт вәкилдәре араһында ла осрай. Йәнәһе, нимәгә кәрәк булған шундай ҡан ҡойоуҙар? Ситтән, йәки быуаттар аша был мәсьәләгә бармаҡ аша ҡараған һымаҡ фекер йөрөтөү, шул уйҙарҙа үҙеңде хәҙерге замандың батыры итеп тойоуы рәхәт шул. Үҙлегеңдән ҡуянды ысҡындырмайым, йәғни ҡотоң алыныуҙан ҡурҡаҡҡа әйләнеп, дер-дер ҡалтыранып йәшәмәйем, тиһәң, этеңде ысҡындыраһың, йәғни уҫаллығыңды күрһәтеп алаһың инде.

Хатта ки донъяның иң ҡеүәтле армияһы тип һаналған батшалыҡ армияһын еңеү мөмкин булмаған хәлдә лә. Ә бит үҙлегенән ҡуянды ысҡындырып, суҡындырылып, үҙҙәрен һаҡлап ҡалыусы ҡәүемдәр ҙә булған. Шулай ҙа һуңғы өс быуатта Рәсәй мөхитендә мосолманлыҡ һаҡланып ҡалһын өсөн, динебеҙ, телебеҙ, еребеҙ хаҡына милләтебеҙ кәрәк мәлдә бәйҙән "этен ысҡындырған". Был йәһәттән беҙ, беҙ генә түгел, Рәсәйҙәге башҡа күп кенә милләттәр ҙә тарихтағы башҡорт ҡаһармандарына бурыслы. Был батырлыҡҡа ҡасандыр бер лайыҡлы баһа бирелергә тейештер бит. Баһалар бирелә башланы ла инде. Билдәле тарихсы Нәҙир Ҡолбахтин гәзиттең 38-се һанында баҫылған "XIX быуат башҡорт өсөн юғалғанмы?.." тигән сығышында был хаҡта түбәндәгесә фекер йөрөтә: "... Шул уҡ ваҡытта XVII, XVIII быуаттарҙағы был героик осорҙа беҙ аҫабалыҡ хоҡуғын һаҡлап, ирегебеҙҙе, динебеҙҙе, телебеҙҙе, мәҙәниәтебеҙҙе һаҡлап алып ҡалғанбыҙ. Крепостной крәҫтиән хәленә ҡалмағанбыҙ. Шул уҡ ваҡытта башҡорттар араһында йәшәүсе мариҙар үҙҙәренең асылын, йәғни мәжүсилеген һаҡлап алып ҡалған. Улар мариҙар ихтилалы һөҙөмтәһендә түгел, башҡорт ихтилалы ярҙамында милләт булараҡ һаҡланып ҡалған. Аспирант сағымда мин бер материал тапҡайным, үкенескә ҡаршы, уны юғалттым. 3-сө һәм 5-се ревизия материалдары буйынса Ҡаҙан губернаһында 250 мең самаһы мосолман татары, 50 меңләп керәшендәр теркәлгән. 5-се ревизияға күҙ һалһаҡ, ундағы татарҙарҙың күпселеге Ырымбур губернаһына, йәғни беҙҙең араға күсеп бөткән. Тимәк, татарҙарҙың мосолманлығы, асылда, башҡорт ерендә һаҡланып ҡалған. Ә Ҡаҙан губернаһында ҡалғандарҙың күбеһе керәшенгә әйләнеп бөткән. Йәғни татарҙар динен, телен, ғөрөф-ғәҙәттәрен батырҙарса көрәшкән башҡорт араһына ышыҡланып һаҡлап алып ҡалған..."

Замандың йөҙө башҡаса хәҙер, ижтимағи ҡоролош 180 градусҡа үҙгәргәйне, төшөнсә-мәғәнәләр ҙә ҡапма-ҡаршылыҡлы төҫ алды: күп осраҡта уғрылыҡ - эшҡыуарлыҡ, ике йөҙлөлөк - яраҡлаша белеү, ҡурҡаҡлыҡ - һығылмалылыҡ, ришүәт биреү - хәлле йәшәү, ришүәт алыу эшлеклелек тип иҫәпләнә, егеттәрҙең әрмегә барыуы түгел, бармай ҡала алыуы булдыҡлылыҡ булып һанала. Ә бит социализм осорондағы күп кенә төшөнсә-мәғәнәләр кешелектең гуманизм принциптарына нигеҙләнгәйне. Күп кенә ғалимдар социалистик тәғлимәттең нигеҙендә дини тәғлимәт ятыуын да таный. Уларҙың фекере буйынса, Лениндың төп хатаһы ла дини тәғлимәткә нигеҙләнгән ҡоролошто һуғышсан атеизм ярҙамында ҡоророға ынтылыуында. Был хәҡиҡәтте беҙ Ҡытай миҫалында таныйбыҙ.

Шуға күрәлер ҙә, ысын батырлыҡтың яуҙа, сәсәнлектең дауҙа һыналыуы халҡыбыҙ тормошоноң мөһим бер өлөшөн алып тора ла инде. Нисек кенә булмаһын, халҡыбыҙ һәм башҡа бик күптәр өсөн үҙлегенән "этен ысҡындырып" йәшәгән атай-олатайҙарыбыҙҙың тарихи ҡаһарманлығы, ниндәй генә үҙгәрештәр булып, илебеҙ нисек кенә аталған ижтимағи ҡоролошта йәшәмәһен, үҙенең әһәмиәтен юғалтмаясаҡ. Тарихты үҙгәртеп тә, уны мөхәррирләп тә булмай.

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓23 ноябрҙә Өфөнөң Конгресс-холында "Башҡортостан Республикаһының иң яҡшы йәш эшҡыуары" премияһын тапшырыу тантанаһы үтәсәк. Рәсәйҙең Башҡортостан Республикаһы буйынса Йәш эшҡыуарҙар ассоциацияһы уны икенсегә үткәрә. "Иң яҡшы йәш эшҡыуарҙы билдәләү инициативалы йәш кешеләргә үҙ эшен булдырғанда үҙҙәрен ышаныслыраҡ тойорға ярҙам итәсәк. Сөнки улар алдында өлгө булырлыҡ лайыҡлы кешеләр сығыш яһаясаҡ", - тине ассоциация рәйесе Илдар Һөйөшев.Конкурста ҡатнашыу өсөн ғаризалар 1 ноябргә тиклем ҡабул ителә. Ойоштороу комитеты телефоны: (347) 299-11-00.

✓Баймаҡта республика мосолмандары Диниә назаратының күсмә пленумы үткәрелде. Пленум барышында БР мосолмандары Диниә назаратының Урал арьяғы вәкиллегенә яңы етәксе - Сибай ҡала округы Төйәләҫ ауылы мәсетенең имам-хатибы Ислам Исламбаев тәғәйенләнде. Баймаҡ ҡалаһындағы мәсет етәксеһе итеп Сибайҙың Алтын ҡасабаһы мәсете имам-хатибы Баймөхәмәт Ғиззәтуллин һайланды.

✓Ғафури районы Сәйетбаба ауылының "Асанай" фольклор коллективы Төрөк республикаһының баш ҡалаһы Анкарала булып, VIII "Анатолия көндәре" халыҡ-ара мәҙәниәт һәм сәнғәт фестивалендә сығыш яһаны. Сара ваҡытында Ғафури районы менән Анкараның Этимесгут районы араһында артабанғы хеҙмәттәшлек мәсьәләләре лә тикшерелде.

✓Ҡаҙағстандың Ҡыҙыл Орда ҡалаһында ТӨРКСОЙ ярҙамында "Деде-Ҡорҡот һәм Бөйөк дала моңо" халыҡ-ара фольклор фестивале үтте. Унда Сибай мәҙәниәт һәм ял үҙәгенең фольклор буйынса белгесе Асия Ғәйнуллина һәм үҙешмәкәр артист Баязит Ғәйнуллин ҡатнашты. Сара сиктәрендә шулай уҡ "Төрки халыҡтарының традицион музыкаһы: хәҙерге торошо һәм киләсәге" халыҡ-ара ғилми-ғәмәли конференцияһы ла үткәрелде. Конференцияның пленар ултырышында Асия Ғәйнуллина "Өҙләү сәнғәте йәки башҡорттар көнкүрешендә өҙләү" тигән доклады менән сығыш яһаны.

✓БР мәҙәниәт министрының беренсе урынбаҫары Камила Дәүләтова етәкселегендәге рәсми делегация Төрксой ағзаһы илдәре мәҙәниәт министрҙарының даими советы ултырышында ҡатнашты. Совет Төрксой ойошмаһының генераль секретары Дюсен Касеиновтың эшмәкәрлеге тураһындағы отчет тыңланы һәм раҫланы. Дюсен Касеинов халыҡ-ара ойошманың генераль секретары итеп ҡайтанан һайланды.

ҮӘТ, ШУЛАЙ!

# ҠАРТТАР ҠАРАУЛЫ,

## ҡарттар ҡәнәғәт беҙҙә

**Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы урынбаҫары Әлфирә Баҡыева журналистар менән осрашыуҙа баш ҡалала өлкән йәштәгеләргә социаль ярҙам күрһәтеү буйынса эшләнгән эштәр тураһында һөйләне.**

БР Хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрлығы мәғлүмәттәренә ярашлы, Өфөлә 226520 пенсионер иҫәпләнә, уларҙың 61304-е - ир-ат, 165216 - ҡатын-ҡыҙ. Уларға медицина һәм социаль ярҙам күрһәтеүҙең сифатын һәм күләмен үҫтереү маҡсатында ҡабул ителгән республика маҡсатлы программаға ярашлы, социаль хеҙмәтләндереү үҙәктәрендә гериатрик ярҙам күрһәтеү артҡан. 2010 йылда 1630 оло кеше шәфҡәт туташы ҡарауы бүлектәрендә дауаланһа, быйылғы йылдың алты айы эсендә был бүлектәр 1033 кешене хеҙмәтләндергән. 2007 йылдан алып госпиталь поликлиникаһы базаһында пенсионерҙар көндөҙгө стационарҙа ла дауалана ала.

Ветерандарҙың торлаҡ шарттарын яҡшыртыу ҙа ҡала округы хакимиәте эшмәкәрлегененең төп йүнәлештәренең береһе булып тора. 2005 йылдың 1 мартынан 647 ветеран иҫәпкә алынған, уларҙың 495-ененң торлаҡ шарттары яҡшыртылған, торлаҡ алыуға 531 танытма тапшырылған. Ҡала хакимиәте федераль бюджет саралары иҫәбенә алынған социаль түләүҙәр ҡулланып, торлаҡ һатып алырға ярҙам итә. Мәҫәлән, 2009-2011 йылдарҙа 241 ветеранға ошондай ярҙам тәрә күрһәтелгән, 3 һуғыш инвалиды торлағын алыштырған. Һуғыш ветерандары һәм уларҙың тол ҡатындарының торлағын ремонтлау буйынса ла эш бара.

Ҡаланың һәр районында ойошторолған комплексы үҙәк хеҙмәткәрҙәре оло кешеләрҙе өйҙәрендә лә хеҙмәтләндерә: аҙыҡ-түлек, медикаменттар һатып ала, аҙыҡ әҙерләй. Үҙәктәрҙең социаль хеҙмәткәрҙәре йылына 5 меңдән ашыу кешегә ярҙам итә. Яңғыҙ һәм инвалид ололар өсөн ваҡытлыса йәшәп тороу бүлектәре лә эшләй. Бында уларҙы көнөнә дүрт тапҡыр ашаталар, социаль-көнкүреш, медицина һәм мәҙәни хеҙмәттәр тәҡдим ителә.

Өфөлә дәүләт яҡлауында булған граждандарға ҡала бюджеты иҫәбенә гәзиттәргә яҙылыу ойошторола. Бынан тыш, ҡалала быйыл социаль ашханалар асылды. Әлегә улар Калинин, Киров, Октябрь райондарында ойошторолған, бында көнөнә 180 кеше туҡлана.

Ҡала хакимиәте оло кешеләрҙең ялын ойоштороу буйынса ла күп эш башҡара. 2011 йылдан ял итеүҙең тағы ла бер үҙенсәлекле формаһы - социаль туризм да пенсионерҙарҙы үҙенең ҡорона алды. Апрель айынан бындай сәйәхәттәрҙә 515 пенсионер булып өлгөргән.

ПРЕЗИДЕНТ ӘЙТКӘС...

# КЕМДЕР ЯРҘАМ ҺОРАНЫ,

## кемдер рәхмәтен белдерҙе

**Ошо көндәрҙә Башҡортостан Республикаһы Президенты Рөстәм Хәмитов граждандарҙы ҡабул итте. Төрлө өлкәгә ҡағылған һорауҙар менән республика етәкселегенә барлығы 9 кеше мөрәжәғәт итте. Шәхси һорауҙар менән бер рәттән, барыһын да борсоған көнүҙәк мәсьәләләрҙә күтәреүселәр ҙә булды.**

Президент менән һөйләшеү төбәктә мотоспортты әүҙемерәк үҫтереү, Затон биҫтәһендәге йәшелсә-емеште күмәртәләп һатыу баҙарын һаҡлап ҡалыу һәм уның урынлашыуы ерен аныҡ билдәләү, Сибай ҡалаһында яңы музыка мәктәбе, Мәләүеҙҙә спорт комплексы төҙөү, Өфө ҡалаһы Калинин районы Максимовка микрорайонының инфраструктураһын яйға һалыу һәм башҡа мәсьәләләрҙе үҙ эсенә алды. Рәсәйҙең атҡаҙанған, Башҡортостандың халыҡ артисы Нәзифә Ҡадырованы Президентҡа республикалағы мотоспорттың бөгөнгө хәле менән борсолоу алып килгән. Бөгөн Башҡортостанда мотоциклда уҙышыу спорты 2000 йылда ойошторолған, Ғабдрахман Ҡадыров исемендәге клуб һәм ошондай уҡ исемде йөрөткән техник спорт Үҙәге нигеҙендә үҫешә, ә был, үҙ сиратында, көстөң һәм аҡсаның ике тармаҡҡа бүленеүен аңлата, ти Нәзифә Ҡадырова. Шулай уҡ һөйләшеүҙә "Строитель" стадионын мотоциклда уҙышыу буйынса йәш спортсыларҙы әҙерләүҙә төп база итеү һәм стадионға билдәле спортсының исемен биреү мәсьәләһе лә күтәрелде. Шулай уҡ эшҡыуар Валерий Кузнецов Ишембай районының Ҙур Байыҡ ауылы янындағы күлдә балыҡ үрсетеүҙе яйға һалыуҙа ярҙам итеүҙе һораны, ә билдәле композитор Салауат Низаметдинов иһә Рөстәм Хәмитовҡа яңы, заманса студия эшләүҙә ярҙам күрһәтеүенә һәм, ғөмүмән, республика етәкселеге тарафынан сәнғәт өлкәһенә ҙур иғтибар бүленеүенә рәхмәтен белдерҙе. Президентҡа шәхси ҡабул итеүгә килгәндәрҙең барыһы ла күтәрелгән мәсьәләләр буйынса аныҡ яуаптар алды.

Башҡортостан Республикаһы Президенты халыҡ менән аралашыуҙы даими ҡағиҙәгә әйләндерҙе, сөнки бындай осрашыуҙар шәхси ҡабул итеүгә генә түгел, шулай уҡ Интернет селтәре һәм телевидение, матбуғат саралары аша һәм республиканың төрлө төбәгенә эш сәфәре барышында ойошторолған аралашыуға ла ҡайтып ҡала. Президент билдәләүенсә, бөгөнгө көндөң төп проблемаһы булып властың халыҡтан айырылыуы тора, ә ошондай аралашыуҙар был арауыҡты кәметеүгә тура юл.

**Гөлназ САФУАНОВА.**

...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

# ХӘЛӘЛ ИТТӘ...

## адреналин булмай

**Баш ҡалала традицион көҙгө ауыл хужалығы йәрминкәләре дауам итә. Үткән ялда иһә беренсе тапҡыр Башҡортостан Республикаһы мосолмандары Диниә назаратының "Хәләл" комитеты һәм Өфөнөң Орджоникидзе районы хакимиәте ойошторған хәләл аҙыҡ-түлек һатыу йәрминкәһе ойошторолдо. Бынан 10-15 йыл элек хәләл аҙыҡ-түлек һораусыға аптырап ҡараһалар, хәҙер быңдай мәсьәлә юҡ. Бөгөнгө көндә Рәсәйҙә 200-ҙән ашыу ойошма хәләл продукция етештерә һәм уларҙың һаны көндән-көн арта.**

Йәрминкәлә хәләл ит һәм ит ризыҡтары, бал, икмәк һәм һөт аҙыҡтары менән бер рәттән, ислам әҙәбиәте һәм атрибутикаһын да һатып алырға мөмкин ине. Мосолман ҡанундарына ярашлы етештерелгән хәләл аҙыҡты тәҡдим итеүселәр һәм һатып алырға теләүселәр араһында төрлө милләт кешеләре һәм дин тотоусылары күп булды. Махсус тикшереү үткән һәм тейешле сертификатҡа эйә булған, кешенең һаулығына зыян килтерерҙәй төрлө ҡушылма, химик матдәләр һәм тәмләткестәр ҡушылмаған аҙыҡ-түлеккә һорау көндән-көн арта. Әлеге йәрминкәлә лә халыҡтың оҙон сират тороп, хәләл аҙыҡ һатып алыуы һәм быңдай продукцияның тиҙ арала һатылып бөтөүе ошо хаҡта асыҡ һөйләй.

- Хәләл итте бары тик мосолмандар ғына ашарға тейеш, тип уйларға ярамай, - тине хәләл ит һатыусы Иштимер Ғәлиев, - Хәләлдең, тәү сиратта, кеше организмына файҙалы икәнлеге хаҡында онотоорға ярамай, сөнки быңдай ит мал организмындағы бөтә шлакты үҙенә йыйған ҡан менән буталмай, ислам ҡанундарына ярашлы һуйылған малда стресс гормоны - адреналин булмай һәм башҡа төрлө сәбәптәр тик хәләл ит ашауға өҫтөнлөк биреүҙең файҙаһын күрһәтә. Шулай уҡ быңдай малдың тик экологик яҡтан таҙа һәм бер ниндәй ҡатнашмалар ҡушылмаған аҙыҡ менән туҡланыуы ла иттең сифатлы булыуы хаҡында һөйләй.

-Мин һәр ваҡыт яҡшы сифаты менән айырылып торған хәләл аҙыҡ ҡына ашарға тырышам,- тип үҙ фекерҙәре менән уртаҡлашты йәрминкәгә килеүсе Азат Ибраһимов, - сөнки үҙ һаулығын ҡайғыртҡан кеше тик ошондай аҙыҡ менән туҡланырға тейеш, тип уйлайым. Шулай уҡ тик хәләл ашағанда ғына беҙ бәрәкәткә, мулыҡҡа өлгәшәсәкбеҙ. Ә кем үҙенә, ғаиләһенә, балаларына, өйөнә бәрәкәт теләмәй? Әлбиттә, барыһы ла. Тик хәләл аҙыҡҡа өҫтөнлөк биргәндә генә быға өлгәшергә була икәнлеген онотоорға ярамай. Шуға күрә магазинда, баҙарҙа ошондай аҙыҡҡа өҫтөнлөк биреү зарур. Ә бындай хәләл йәрминкәләр артабан да үткәрелер һәм ҡала халҡына сифатлы аҙыҡ-түлек һатып алыуҙа ҙур ярҙам булыр, тип уйлайым.

Йәрминкәнән халыҡ та, үҙ тауарын һатыусылар ҙа ҡәнәғәт ҡалды. Хәләл продукция етештереүселәр шулай уҡ республиканың башҡа ҡала һәм райондарында ла ошондай уҡ хәләл йәрминкәләрҙә үҙ тауарҙарын тәҡдим итергә теләүҙәре хаҡында белдерҙе.

**Наҙгөл САФИУЛЛИНА.**

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✔Үткән аҙналағы дөйөм ҡала өмәһендә Өфөлә 120 меңдән ашыу кеше ҡатнашты. Ҡаты көнкүреш ҡалдыҡтары полигонына дүрт мең кубометрҙан ашыу сүп-сар сығарып түгелде. Бынан бер көн алда, шулай уҡ биләмәләрҙе таҙалау һәм төҙөкләндереү айлығы сиктәрендә үткән санитар йомала 43 меңгә яҡын өфөлө ҡатнашҡан. Ике мең кубометрҙан ашыу сүп-сар ҡаты көнкүреш ҡалдыҡтары полигонына оҙатылған.

✔ VII "Ҡала мөхите" социаль реклама фестиваленә эштәр ҡабул ителә башланы. Эштәр 20 октябргә тиклем ҡабул ителә, ә фестиваль үҙе ноябрҙең икенсе яртыһында үтәсәк. Фестиваль тураһында 8 (347) 2-911-193, 2-911-194 телефондары аша белешә алаһығыҙ.

✔1 һәм 2 октябрҙә Өфөлә "Ғүмерҙең алтын мәле" проекты сиктәрендә ололар өсөн бер нисә сара үткәреләсәк, уларға төрлө хеҙмәттәр күрһәтеләсәк. Ял көндәрендә "Өфө" универмагы бинаһында 11-ҙән 16 сәғәткә тиклем ололар юристарҙан, шулай уҡ федераль һәм республика министрлыҡтары һәм ведомстволары вәкилдәренән консультация алаcаҡ. "Уфанет" компанияһы башланғысы менән бында пенсионерҙар интернетта эшләү серҙәренә лә төшөнә аласаҡ. Ошонда уҡ пенсионерҙарға бушлай флюорография үтеү, ҡан баҫымын үлсәү һәм электрокардиограмма эшләү мөмкинлеге биреләсәк.

✔Ҡытай халыҡ республикаһы Өфө предприятиеларының иң әүҙем партнерҙарының береһе булып иҫәпләнә. Был республика баш ҡаланың экспорт-импорт операциялары буйынса 4-се, импорт буйынса башҡа 80 сит ил партнерҙары араһында 2-се урында тора. Былтыр Ҡытай менән тауар әйләнеше 135 млн АҠШ доллары, быйыл алты айҙа 58 млн доллар тәшкил иткән. Ике яҡлы бәйләнештәрҙе нығытыу маҡсатында Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы Павел Качкаев етәкселегендәге рәсми делегация ошо көндәрҙә Ҡытайҙың Шэньян ҡалаһында булып ҡайтты.

✔Башҡортостанда йыл эсендә эшһеҙлек кимәле кәмегән. Дөйөм эшһеҙлек кимәле 6,9 процент тәшкил итә, ә уҙған йылдың ошо уҡ осорона 8,8 процент тура килә ине. Теркәлгән эшһеҙлек кимәле 1,6 процентҡа тиклем кәмегән.

БЕЛЕМ УСАҒЫ

**Баш ҡаланың "Көньяҡ" биҫтәһендә урынлашҡан Мостай Кәрим исемендәге 158-се башҡорт гимназияһы үҙенең биш йыллыҡ юбилейын билдәләй. Ҡарар күҙгә әҙ генә күренгән, ләкин үҙ эсенә бихисап ваҡиғалар һыйҙырып, меңәрләгән уҡыусы өсөн яҡын һәм ҡәҙерлегә әйләнгән йылдар теҙмәһе ул. Ошо күркәм дата алдынан гимназия директоры Гөлназ Ғәфир ҡыҙы ӘХМӘҘИЕВА менән осрашып, белем усағының йәшәйеше хаҡында әңгәмә ҡорҙоҡ.**

# БЫНДА КҮҢЕЛ БУШЛЫҒЫ ЮҠ,

## ул рух һәм белем менән тултырыла

Һәр белем усағының төп көсө - профессиональ, үҙ эшенә яуаплы ҡараған педагогик коллектив. Был йәһәттән гимназия бәхетле, сөнки бында нәҡ ошондай уҡытыусылар балаларға белем тауына артылырға ярҙам итә. Тәүге көндәрҙән алып эшләгән тәжрибәле уҡытыусылар менән бер рәттән, республикабыҙҙың төрлө уҡыу йорттарын тамамлап, гимназияға эшкә килгән йәштәр ҙә һынатмай. Йәш белгестәр яңыса фекерләүе, мәғариф өлкәһендәге төрлө яңылыҡтарҙы тиҙ үҙләштереүе менән белем биреү процесын ҡыҙыҡлы һәм мауыҡтырғыс итә.

Гимназияла уҡыусы 870 уҡыусыға төплө белем алыу өсөн бөтә мөмкинлектәр ҙә булдырылған. Юғары уҡыу йортона уҡырға инеүҙе еңеләйтеү маҡсатында гимназия уҡыусылары 10-сы синыфтан 3 профилдә, йәғни физика-математика, социаль-гуманитар һәм химия-биология йүнәлештәре буйынса белем ала. Быйыл, мәҫәлән, 11-се синыфты тамамлаған 45 уҡыусының барыһы ла профилдәренә ярашлы уҡырға инде. Сығарылыш синыфы уҡыусылары республиканың киң билдәлелек яулаған уҡыу йорттарына уҡырға инде. Быйылғы уҡыу йылында 1 класҡа уҡырға килгән 94 бала ла үҙҙәренең иң матур, иҫтәлекле көндәрен ошо белем усағында үткәрер, тип ышанабыҙ.

Гимназия инновацион белем усағы булараҡ балаларға төплө белем биреү өсөн һәйбәт матди шарттарға эйә. Мәктәптә фәнни-методик база булыуы һәм уңышлы эшләүе лә белем биреү процесын сифатлы һәм төплө итә. Шулай уҡ гимназияның юғары уҡыу йорттары менән тығыҙ бәйләнештә эшләүе лә үҙ һөҙөмтәһен бирмәй ҡалмай. Мәҫәлән, М.Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университеты менән тәүге көндәрҙән үк хеҙмәттәшлек булдырылған һәм бөгөнгө көндә был юғары уҡыу йорто менән ике йүнәлештә уңышлы эшләү дауам итә. Өфө дәүләт нефть техник университеты тарафынан булдырылған "университет класы" иһә быйыл өсөнсө йыл рәттән эшләй һәм физика-математика профилле класс уҡыусыларына өҫтәмә дәрестәр бирә. Шулай уҡ Өфө дәүләт иктисад һәм сервис академияһының айырым кафедралары һәм Башҡорт дәүләт университетының айырым ғалимдары менән дә гимназия тығыҙ бәйләнеш булдырған.




Гимназияла икенсе йыл эшләүсе Бизнес-клубта эшҡыуарлыҡ нигеҙҙәре буйынса уҡытыу ойошторолған. Былтыр уҡыусылар үҙҙәренең бизнес-проекттарын эшләп, төрлө конкурс, конференцияларҙа уңышлы сығыш яһаны. Балаларҙа эшҡыуарлыҡҡа ҡыҙыҡһыныу уятыу өсөн был өлкәләге ыңғай һәм кире яҡтарҙы анализларға өйрәтеү маҡсатында бизнес һәм эшҡыуарлыҡта уңышҡа өлгәшкән кешеләр менән осрашыуҙар, һөйләшеүҙәр үткәрелә. Баланы ҡоро һүҙ менән түгел, ә көндәлек тормошта аныҡ миҫалында тәрбиәләү күпкә һөҙөмтәлерәк, шуға күрә мәктәп стенаһы сиктәрендә ошондай осрашыуҙар үткәреү, шулай уҡ төрлө ойошма, предприятиеларға барып эш процесын күреү ҙә юғары һөҙөмтәләр килтерәсәк, тип ышанабыҙ.

Туған телебеҙ матур һәм бөйөк, мәҙәниәтебеҙ һәм тарихыбыҙ һоҡланырлыҡ һәм тәрән йөкмәткеле - былар барыһы ла балалар күңеленә түкмәй-сәсмәй еткерелергә тейеш, һәм бында белем усағы төп әһәмиәткә эйә. Бөгөнгө көндә хатта зыялыларыбыҙҙың ғаиләләрендә лә башҡорт телендә аралашыуҙың кәмеп барыуы ҙур хәүеф тыуҙыра, шуға күрә гимназия ошо бушлыҡты тултырыусы булырға тейеш, тигән маҡсатты күҙ уңынан ысҡындырмайбыҙ. Гимназияла милли-төбәк компоненты уҡытыуға ҙур иғтибар бирелә һәм башҡорт теле 1-11 кластарҙа өйрәнелә.

Һаулығы ныҡ баланың ғына уҡырға, белемен камиллаштырырға, төрлө түңәрәктәргә йөрөргә теләге һәм көйәфе була, шуға күрә гимназияла уҡыусыларҙың һаулығына ҙур иғтибар бүленә. Был йәһәттән гимназияла көндөҙгө дауалау-һауыҡтырыу комплексы ойошторолған, был балаларға үҙҙәренә кәрәкле дауалау курстарын урында уҡ алыу мөмкинлеге бирә. Шулай уҡ ныҡлы матди база менән йыһазландырылған ике спорт залының, тренажер һәм ритмика залдарының уңышлы эшләүе лә уҡыусыларға үҙ һаулығын нығытыуға булышлыҡ итә. Әйткәндәй, гимназияның бер спорт залы бейек ҡаяға үрмәләү (скалодром) комплексы менән йыһазландырылған.

Бала уҡыу менән генә йәшәй алмай, уның күңеле сәнғәткә, ижадҡа тартыла һәм был өлкәләге барлыҡ матур башланғыстар ҙа ололар тарафынан яҡлау табырға тейеш. Гимназияла Нариман Сабитов исемендәге музыка мәктәбе филиалының эшләүе, төрлө концерт һәм кисәләр уҙғарыу өсөн 450 урынлыҡ тантаналар залы булыуы ла сәнғәткә битараф булмағандарға ныҡ ярҙам итә. Шулай уҡ балалар йыр, халыҡ һәм хәҙерге бейеүҙәр, ИЗО студияһы, драма һәм фольклор түңәрәктәрендә лә ҙур ихласлыҡ менән шөғөлләнә. Барлыҡ был шарттар тупланмаһы гимназия уҡыусыларының район, ҡала һәм республика кимәлендә спорт һәм мәҙәни саралар-ҙа ҙур уңыштарға өлгәшеүенә булышлыҡ итә.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Мәктәп һәр кешенең ғүмерендә тәрән эҙ ҡалдырыусы урын. Ләкин һуңғы ҡыңғыраухан һуң белем усағы хаҡында күңелдә бары тик яҡты хәтирәләр генә ҡалһын өсөн ундағы мөхиттең ыңғай һәм эшлекле, уҡытыусыларҙың үҙ эшенә мөкиббән киткән профессионалдар, ә синыфташтарҙың бер-береһенә ихтирамлы һәм иғтибарлы булыуы мөһим. Халҡыбыҙҙың билдәле шәхесе Мостай Кәрим исемен йөрөткән 158-се башҡорт гимназияһында нәҡ ошондай шарттар булдырылған да инде. Ышаныслы аҙымдар менән атлаған белем усағының еңеүҙәре, уңыштары һәм ҡаҙаныштарының алда күп буласағына шик юҡ, сөнки уның биш йыл эсендә үтелгән юлы һөҙөмтәле, бөгөнгөһө ныҡлы, ә киләсәккә ҡоролған уй-маҡсаттары аныҡ.**

Сәлимә АРЫҪЛАНОВА
яҙып алды.

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

# ӘҘӘПЛЕ БУЛЫУ...

## министрға ла фарыз

**Башҡортостанда министр һәм депутаттарға намыҫ һәм ғәҙеллек өлгөһө булыу бурысы йөкмәтелде. Әхлаҡ кодексы хаҡындағы указға республика Президенты Рөстәм Хәмитов ҡул ҡуйҙы.**

Указға ярашлы, "А" категориялы, йәғни дәүләт граждандыҡ вазифаһын (государственные гражданские должности) биләүсе VIP-чиновниктар рәтенә Президент, уның хакимиәте етәксеһе, хакимиәт эштәре менән идара итеүсе, кәңәшсеһе, Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай рәйесе, уның урынбаҫарҙары, даими нигеҙҙә эшләүсе депутаттар, хөкүмәт Премьер-министры һәм уның урынбаҫарҙары, министрҙар, дәүләт комитеты рәйестәре, кеше һәм бала хоҡуҡтары буйынса вәкил һәм башҡа юғары вазифа биләүселәр инә. Кодекс пункттарын боҙған өсөн чиновник эштән бушатылырға мөмкин - был хаҡтағы ҡағиҙә эш контрактына өҫтәләсәк.

**VIP-чиновниктар шуны эшләргә тейеш:**

- шәхси өлгөһө менән үҙенең ҡул аҫтындағыларға намыҫ, ғәҙеллек һәм дөрөҫлөк өлгөһө булырға;
- кеше менән аралашҡанда әҙәпле һәм иғтибарлы булырға;
- үҙ абруйына йәки республиканың дәүләт органдары абруйына зыян килтерерҙәй хәлдәрҙән һаҡланырға;
- республиканың, Рәсәйҙең һәм башҡа дәүләт халҡының йола һәм ғөрөф-ғәҙәттәренә хөрмәт һәм сабырлыҡ күрһәтергә;
- йыл һайын ғаиләһендәге бәлиғ булмағандарҙың килеме һәм мөлкәте хаҡында отчет бирергә.

**...тейеш түгел:**

- ниндәй ҙә булһа профессиональ йәки социаль төркөмгә һәм ойошмаға өҫтөнлөк бирергә. Айырым граждандар, профессиональ һәм социаль төркөмдәрҙән бойондороҡһоҙ булырға;
- вазифаһын намыҫлы башҡарырға ҡамасаулаусы шәхси финанс һәм мөлкәт мәнфәғәтен алға ҡуйырға;
- эш урынын үҙенең шәхси мәсьәләләрен хәл итеүҙә файҙаланырға;
- кешенең енесенә, йәшенә, милләтенә, теленә, социаль һәм мөлкәт хәленә, дини ҡараштарына бәйле абруйын төшөрөргә;
- тәкәбберлек күрһәтергә, иҫкәрмәләр яһарға, нахаҡ ғәйептәр тағырға.

Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



### Ҡомалаҡ тубырсығы

Геморрой яфалағанда 1 ҡалаҡ кипкән ҡомалаҡ тубырсығын 1 стакан һыуға һалып, һүрән утта 10 минут тоторға, һөҙөп, көнө буйы ваҡ йотомдар менән эсеп бөтөрөргә.

### Теш һыҙлағанда

Теш табибына әләгә алмайынса, үҙ алдыңа дауаланғанда: шалфей үләне төнәтмәһе менән ауыҙығыҙҙы сайҡатығыҙ, һыҙлаған теш өҫтөндә төнәтмәне оҙағыраҡ тотоғоҙ. Ярты сәғәт эсендә 3-4 мәртәбә сайҡап төкөрөгөҙ. Һыҙлаған теш яғындағы ҡолағығыҙға юл япрағы (подорожник) тамырын тығығыҙ (бәләкәс кенә киҫеп) һәм теш һыҙлауы баҫылғансы тотоғоҙ.

### Ҡан баҫымы ҡапыл үҙгәрһә

Ай буйы көнбағыш хәлүәһе ашарға кәрәк, әммә уға йөҙөм, сәтләүек һ.б. ҡушылмаған булһын. Көнөнә 100 гр. ашарға, 1 ултырыуҙа ла ашап була, әммә өскә бүлеп ашаһаң, файҙаһы ҙурыраҡ. Ҡан баҫымы күтәрелһә, 1 стакан ҡабыҡлы көнбағышты йыуып, 3 л. һыуҙа әкрен утта 10 минут ҡайнатырға, төрөп ҡуйырға, һыуынғас ҡына һөҙөргә һәм көн буйы һыу, сәй урынына эсергә. 2 көндә эсеп бөтөрөргә. Ай буйы эсһәң, ҡан баҫымы нормалләшә, үлсәп торогоҙ.

### Ҡулыңды йәрәхәтләһәң

Әле хужабикәләр йәшелсә тоҙлау, салат әҙерләү менән мәшғүл. Бысаҡ, башҡа эш ҡоралы менән ҡулды ла йәрәхәтләп ебәрәләр. Йәрәхәтте тиҙ йүнәлтеү өсөн бер кишерҙе таҙартып, ҡырғыстан үткәрергә һәм шул массаны йәрәхәт өҫтөнә һалып, өҫтөнән балауыҙланған ҡағыҙ ябып, бинтлап ҡуйырға.

### Тымау

Тымау башланыу менән табандарға горчичник ҡуйып бәйләргә һәм йөн ойоҡ кейеп, 1-2 сәғәт торорға. Горчичниктарҙы алғас, шәп-шәп йөрөп алырға. Дауаны йоҡлар алдынан эшләү ҡулайлы; ❖ танау тишектәренә көнөнә 2-3 мәртәбә каланхоэ гөлөнөң һутын һөртөргә, 2-3 тамсыһын танауға тамыҙырға кәрәк; ❖ тымауға грипп ҡушылмаған булһа, ярты стакан һыуға 5 тамсы йод тамыҙып эсеү ҙә файҙалы; ❖ ярты сәғәт һайын тәүҙә һул танау тишеге, һуңынан уңы менән сиратлап нашатыр спиртын еҫкәргә була; ❖ йыш тымаулаһағыҙ, 36-37 градусҡа тиклем йылытылған тоҙло һыу менән танау ҡыуышлығын сайҡарға кәрәк.

Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.




# МИЛЛӘТ ТӘРБИӘЛЕ,
## ҡатындары тәрбиәле булһа

**Ғаиләнең нигеҙ терәге - ҡатын, тинек. Был иң дөрөҫ фекер булһа кәрәк. Сөнки кешеләр холоҡ үә тәрбиә мөнәсәбәтендә ҡатындарҙан башҡа бер кемгә лә эйәрмәҫ. Араларында бөйөк мәктәптәрҙә үә бөйөк фекерле әҙәмдәр янында ғилем өйрәнгәндәр ҙә булыр, ләкин улар ҙа әсәләренән алған тәрбиә менән йәшәр һәм был тәрбиәне һуңғы көндәренә ҡәҙәр һаҡлар.**

Хөрмәтле фәйләсуфтәрҙең береһе: "Кешеләр һәр ваҡыт ҡатындар теләгәнсә буласаҡтыр; бөйөк үә өҫтөн кешеләр, әгәр ҙә ихтыяжығыҙ булһа, ҡатындарға бөйөклөк һәм өҫтөнлөк тураһында өйрәтегеҙ!" - тигән.

Тәрбиәле ҡатын атаһы менән әсәһен, ире менән балаһын, бер һүҙ менән әйткәндә, бөтөн ғаилә ағзаларын һәм ғаиләгә мөнәсәбәте булған дуҫтарҙы, күршеләрҙе, шулай уҡ хеҙмәтсе ир-егеттәрҙе үә ҡатын-ҡыҙҙарҙы үҙенең тәрбиәһе үә гүзәл холҡо менән шатландырыр, үҙе лә бәхетле ғүмер һөрәр. Әммә тәрбиәһеҙ ҡатын, киреһенсә, атаһы менән әсәһен, ире менән балаһын донъя мәсхәрәһенә ҡалдырыр, үҙе лә бәхетһеҙ булып йәшәр, балаларының тормошон да аҫтын өҫкә килтерер. Ул ҡыҙ булыу үә әсәлек кеүек әхирәт ниғмәттәренән өлөш алмайынса, мәхрүм булып алыр.

Бер кеше ни ҡәҙәр бай үә ни ҡәҙәр мәртәбәле булһа ла, тәрбиәле ҡатыны булмайынса, бәхетле түгелдер. Сөнки бәхет ғаилә эсендә рәхәт ғүмер итеүҙән ғибәрәт, ә ғаилә эсендә рәхәт күрмәгәндәр ғаиләнән тыш рәхәт күрә белмәҫ.

Шул сәбәпле, ҡатындарҙың тәрбиәле булыуы бөтөн милләткә файҙалы булыр. Һис шикһеҙ, ҡатындар өсөн тейеш булған ғилем үә тәрбиәнең маҡсаты - үҙ дәрәжәнде һаҡлау, инсафлылыҡҡа, гүзәл ғәмәлдәргә өлгәшеү. Әгәр ҙә ҡатындар тәрбиә үә ғилемгә эйә булһа, тәрбиә үә гүзәл холоҡ балаларға күсер, шунан ул ғәжәп ҙур тиҙлек менән ҡәүем, ҡәбилә, милләт араһына йәйелер үә аҙ ғына бер ваҡыт эсендә ныҡлы тамырланыр.

Тәбиғи хәлдәрендә ҡалған балаларҙы гүзәл мәктәптәр үә гүзәл холоҡло мөғәллимдәр менән аралаштырыу ҡулай булыр, ләкин тәрбиәһеҙ ҡатындарҙан тәрбиә алған балаларҙы яҡшы яҡҡа үҙгәртеү ауырҙыр. Сөнки әсәһенән алған тәрбиәне бала ғүмере буйы ташлай алмаҫ. Тәрбиәһеҙ ҡатындар ҡосағында тәрбиәләнгән балалар, хатта мәктәпкә барып ғилем өйрәнгәндә лә ғилемдәрен юҡ нәмәгә ҡорал итер.

Баланың динендә иғтибарһыҙ, атаһы һәм әсәһенә уҫал мөғәмәләлә булыуының боҙоҡ холоҡҡа нигеҙләнеүе үлемдән дә ҡурҡыныс. Үҙенә хәйерле киләсәк теләп, көсһеҙ ҡалғанда уның шәфҡәт ҡулағаһендә рәхәт ғүмер кисереү ниәте менән аҫрап үҫтергән балаһынан уҫал мөғәмәлә күргән ата үә әсә өсөн балаһының был донъяла йәшәүенән ниндәй файҙа булыр?..

Шулай булыуға ҡарамаҫтан, бындай хәсрәттәргә күп ваҡытта ата-әсәләр үҙҙәре сәбәпсе була, балаларына тейешле тәрбиә бирмәйенсә, тәрбиә эшен еңелгә һанауҙары - ошоларға сәбәпсе булыр.

Шулай булғас, ҡатындарға тәрбиә биреү - иң кәрәкле ғәмәлдер. Ҡатындарҙың биҙәктәре - ынйылары, хәтфә камзулдары, ебәк күлдәктәре, алтын беләҙектәре түгел, бәлки, тәрбиәле булыуҙары бик мөһимдер.

ТЕЛЕМ, ТЕЛГЕНӘМ...

# ӘЙТКӘНДЕ ГЕНӘ ЭШЛӘМӘ,
## үҙең белеп тә эшлә...

**Гәзиттең үткән һанында башҡорт телен уҡытыуҙы үҙгәртеү кәрәклеге тураһында һүҙ ҡуҙғатҡайныҡ. "Ә нисек уҡытырға һуң?" тигән һорауҙы ҡуйыр һәм уға яуап бирер алдынан балаларҙың дөйөм үҫеүен тәьмин итә торған шарттарға бер аҙ туҡталайыҡ.**

Кешене эшкә эште эшләтеп ҡарап ҡына өйрәтеп була. Сөй ҡаҡырға өйрәтер өсөн баланың бер ҡулына сөй, икенсеһенә сүкеш тотторорға кәрәк. Ғөмүмән, бөтә эшкә лә кеше эшләп ҡарап ҡына өйрәнә. Тик бала үҫкәндә, уның эшләй белеүе генә иң мөһиме түгел. Ҡолдар ҙа, крепостной крәҫтиәндәр ҙә эшләй белгән. Аттар ҙа эшләй. Ә бөләкәй баланың интеллектуаль яҡтан, ижади яҡтан үҫеүен тәьмин итеү өсөн эш эшләй белеү генә етмәй. Кеше эшмәкәрлек нигеҙендә генә үҙенсәлекле фекер йөрөтә алған шәхес булып үҫә ала. Эшмәкәрлектең уны эштән айыра торған бер нисә билдәһе бар. Эшмәкәрлек иң тәүҙә кәрәклектән (маҡсат ҡуйыуҙан) башлана. Артабан план төҙөлә: эш тәртибе, материал, инструмент-ҡоралдар һ.б. билдәләнә, әҙерләнә. Әҙерлек бөткәс, туранан-тура эш башҡарыла. Аҙаҡтан эште башҡарыусы үҙ эшенә анализ яһай, баһалай. Шулай итеп, эшмәкәрлек дүрт өлөштән тора: маҡсат - әҙерлек - эш - баһа. Эшмәкәрлектең бөтә билдәләре һаҡланғанда ғына, бала интеллектуаль яҡтан үҫергә мөмкинлек ала. Тулы эшмәкәрлек балаларҙың ҳаллы уйынында ғына була. Уйындағы бөтә этаптарҙы ла балалар үҙҙәре башҡара. Шуға ла уйын уларға ҡыҙыҡ, ул ялҡытмай. Мәктәптә иһә балаға нигеҙҙә билдәләрҙең өсөнсөһө генә эләгә. Уҡытыусы маҡсат ҡуя, ул планлаштыра һәм ул уҡ баһалай. Уҡыусы, икенсе төрлө әйткәндә, әйткәнде эшләргә генә өйрәнә, шуға күнегеп китә. Һөҙөмтәлә ҳаллылығы етерлек кимәлдә формалашып өлгөрмәй. Ошо ыңғайҙан Хужа Насретдинға бәйле киң билдәле бер көләмәсте иҫкә төшөргә килә. Еткән улына көләш һайларға ҡарар иткән Хужа улын арбаға һуҙып һала ла: "Әйткәнде эшләмә, әйткәнде эшләмә!" - тип, уны сыбыҡлай ти. Быны күргән ҡыҙҙарҙың күбеһе Хужаны аңламай, әйткәнде эшләгәс, яҡшы ла һуң, тип, үҙ фекерен белдерәләр. Тик бер ҡыҙ ғына: "Нығыраҡ сыбыҡла, Хужа ағай, йәше еткән, үҙе белеп эшләһен", - ти. Хужа улының ҡолағына шым ғына: "Бына һиңә көләш, шуны алабыҙ", - ти.

Бөгөн беҙҙең ауылдарҙа көләш алырға ҡыймайынса, эш таба алмайынса, үҙен ҡайҙа ҡуйырға белмәйенсә, гел башҡаларҙан ниҙер көтөп, өмөт итеп йөрөгән ир-егеттәребеҙҙең күбәйеүенә ошолай уҡытыу ҙа үҙенең ҙур өлөшөн индерә бит. Әлбиттә, милләт ир-егеттәренең бөгөнгө хәленә мәктәп кенә ғәйепле түгел. Улай раҫлау бер яҡлы ғына булыр ине. Тормош бит күп түгел. Ул меңәрләгән ҡырлы геометрик фигуранан да ҡатмарлы. Шулай ҙа кешенең үҙен-үҙе ҡайғыртып ҡына йәшәй алыуын талап иткән бөгөнгө шарттарҙа балаларыбыҙҙың ҳаллылығын, төрлө хәлдәрҙән сығыу юлдарын таба алыу һәләтен, эшҡыуарлыҡ телә-ген һәм елеген мәктәп формалаштыра алыр ине.

Әгәр минән: "Башҡорт мәктәбенең иң төп билдәһе нимәлә?" - тип һораһалар, мин тыйыуҙа тип әйтер инем. Башҡорт мәктәбендә эшләүселәр, үҙҙәренең берәй коллегаһын профессиональ яҡтан баһаларға булһа, иң тәүҙә, ул балаларҙы тыя ла алмай, тиҙәр. Оҙаҡ йылдар тыйылып үҫкән һәм әйтелгәнде генә эшләп күнеккән балаларҙың ҡайһы берҙәре ҳаллы тормошҡа, ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, әҙер булмай сыға. Бөгөнгө ауылдарыбыҙҙың хәле - шуны раҫлай торған иң күңелһеҙ һәм борсоулы бер миҫал. Тыйыу - беҙҙең борондан килгән милли тәрбиә үҙенсәлеге түгел. Тыйылып үҫкән балаларҙан Салауаттар, Ҡаһымдар, Буранбайҙар, Вәлидиҙәр, Мортазиндар барлыҡҡа килмәй. Тыйыу беҙгә 20-се быуаттың ҡыҙылыштары, ҡырылыштары арҡаһында килеп ингән. Беҙ бөләкәй саҡтағы: "Сеү, ана урыҫ килә!" - тип өләсәй, инәйҙәрҙең тыйыуы әле лә ҡолаҡта яңғырағандай. Шул саҡтарҙан тыйыуҙар шауҡымы мәктәптәребеҙгә лә килеп инде һәм, уҡытыусыларға оҡшап ҡалып, һаман шунда йәшәүен дауам итә. Ижади фекер йөрөтә алған, теләһә ниндәй ситуацияла ла юғалып ҡалмай торған, үҙ өҫтөнә яуаплылыҡ ала алған, эшҡыуарлыҡ һәләтенә эйә булған, үҙ-үҙенә ышанған йәштәрҙе тәрбиәләүҙең нигеҙендә тыйыу ятмай.

Тағы ла бер әйбергә иғтибар итеү фарыҙ булыр. Егеттәребеҙҙең инициативаһыҙ, ҡыйыуныҙ булыуы тураһында күп яҙабыҙ, лидерҙарҙың аҙ булыуына ла борсолабыҙ. Был хәлде лә мәктәп бер аҙ ыңғай яҡҡа үҙгәртә ала. Класта малайҙарҙы бер рәткә, ҡыҙҙарҙы икенсе рәткә ултыртыу ғына ла (параллель кластар булғанда - малайҙар, ҡыҙҙар класына бүлеү) малайҙарҙың егет булып үҫеүенә йоғонто яһай ала. Сөнки, ҡатнаш ултырғанда, уҡытыусы (ә уларҙың 80 проценты ҡатын-ҡыҙ затынан), ғөмүмән, әүҙемерәк булған ҡыҙҙарға күберәк таяна барыбер, кластың лидерҙары шуға ла ғәҙәттә ҡыҙҙарҙан була. Ә айырым ултырғанда, егеттәр ултырған рәттә лә лидерҙар барлыҡҡа килә. Ыңғайҙан шуны ла өҫтәйек: ижади характерҙағы эштәрҙең ҡайһы берҙәрен егеттәр өсөн айырым, ҡыҙҙар өсөн айырым биреп була. Беҙҙең Сибай ҡалаһының 13-сө гимназияһында егеттәрҙе, ҡыҙҙарҙы айырым уҡытҡан, уҡытыусыларға ла, ата-әсәләргә лә, балаларҙың үҙҙәренә лә оҡшаған ыңғай тәжрибәбеҙ бар.

Шулай итеп, туған тел дәрестәрен оптималь кимәлдә үткәреү өсөн, беҙҙең уйыбыҙса, түбәндәгеләр талап ителә: берҙән, уҡытыу балаларҙың эшмәкәрлеген тәьмин итергә тейеш. Икенсенән, тыйыу алымын, тотошлай бөтөрмәгәндә лә, мөмкин тиклем кәметергә кәрәк.

Вәкил ХАЖИН,
педагогика фәндәре
кандидаты.
(Дауамы. Башы 39-сы һанда).



# АБРУЙ ЯУЛАУҒА...

## кешелеклелек аша өлгәшелә

**Бөгөн илебеҙҙә мәғариф системаһынан да күберәк үҙгәрештәргә дусар ителеүсе башҡа өлкә юҡтыр. Берҙәм дәүләт имтихандары килтереп тыуҙырған шау-шыу тынып өлгөрмәне, Федераль дәүләт мәғариф стандарты, унан ҡала яңы санитар-эпидемиологик стандарт, системаны оптималләштереү бик күп һорауҙар, проблемалар тыуҙырҙы һәм йәмәғәтселек ризаһыҙлығына сәбәпсе булды. Бына ошондай һәр төрлө тәжрибәгә дусар ителеүсе уҡыусы балалар һәм уларҙың ата-әсәләре фекере менән ҡыҙыҡһыныусы ла юҡ, әлбиттә. Ә бына әлеге үҙгәрештәрҙең күбеһен үҙ аңы һәм йөрәге аша үткәреп, уны балаларға сифатлы белем биреүҙә ҡулланырға тейешле төп кеше - уҡытыусылар ни уйлай икән һуң? Изге йолаға әүерелгән Уҡытыусылар көнө алдынан Өфөләге 42-се урта мәктәптең химия уҡытыусыһы, Башҡортостандың халыҡ уҡытыусыһы Лиза Ҡыяметдин ҡыҙы ӘҒӘҘУЛЛИНА редакциябыҙҙа ҡунаҡта булды һәм мәғариф өлкәһендәге ҡайһы бер мәсьәләләргә үҙ мөнәсәбәтен белдерҙе, бай педагогик тәжрибәһе менән уртаҡлашты.**

**Совет осоро мәктәбен һағынып һөйләүселәрҙе йыш осратырға тура килә, ләкин, заман башҡа - заң башҡа, тигәндәй, йәмғиәт ҡанундары һәр даим прогресҡа нигеҙләнеп, алға тәгәрәй. Бөгөн кисәге менән йәшәп булмай, ни тиһәң дә, XXI быуатҡа аяҡ баҫтыҡ. Яңы осорҙа йәшәргә тейешле яңы быуын тәрбиәләү - бына ниндәй бурыс ҡуйыла бөгөн мәғариф системаһы алдына. 52 йыл ғүмерегеҙҙе балаларға белем биреүгә бағышлаған кеше булараҡ, бөгөнгө реформаларға ҡарата фекерегеҙ ниндәй?**

- Дөрөҫ әйтәһегеҙ, прогресһыҙ киләсәк юҡ. Берәү ҙә модернизацияға ҡаршы түгел, ләкин беҙ был реформаларҙы ниндәй ерлектә, ниндәй шарттарҙа тормошҡа атҡарырға тейешбеҙ - бәлки, иң тәүҙә ошо хаҡта уйларға, яңылыҡҡа нигеҙ булдырыу хәстәрлеген күрергә кәрәк булғандыр, тигән фекерҙәмен. Мәҫәлән, ошо ғына фактты алып ҡарайыҡ: 1 сентябрҙән 1-се класс уҡыусылары яңы федераль стандартҡа күсте, ә мәктәптәрҙе дәреслектәр менән алдан тәьмин итеү хәстәрлеге күрелмәне. Йә булмаһа, йәмәғәтселекте, бигерәк тә ауыл халҡын борсоуға һалған оптималләштереү мәсьәләһе. Балалар һаны тейешле нормаға тап килмәй, тип, мәктәптәрҙе ябыу ауылдарҙың киләсәгенә юл ябыу буласаҡ бит. "Перспективаһыҙ" ауылдар тигән тарихи хатаны ҡабатлайбыҙ түгелме? Финанс үҙаллылығы тип, мәктәп директорҙарына ҡайһы бер мәсьәләләрҙә "автономия" биреүҙең кире эҙемтәләре килеп сыҡмаҫмы? Эш хаҡы, өҫтәмә түләүҙәр, дәрес-сәғәттәр һаны буйынса былай ҙа әле үгәйһетелеп ҡаралыусылар аҙ түгел. Һорауҙар күп, әлбиттә. Уларҙың бөтәһенә лә яуап итеп, мин, бөтә нәмәлә лә сама белергә кәрәк, тип кенә әйтә алам. Сөнки күрәм, сама761ны онотоп киттек. Әгәр ул тейешле ерлеккә нигеҙләнмәһә, туҡтауһыҙ модернизация артынан ҡыуыу отчет өсөн генә башҡарылмаҫмы, тигән хәүеф тә тыуып ҡуя күңелдә.

Мине, мәҫәлән, балаларҙы "компьютерлаштырыу" мәсьәләһе лә борсоуға һала. Тиҙҙән уҡытыусыны виртуаль донъя алмаштырмаҫмы? Онлайн-уҡытыу программаһының үҙ өҫтөнлөктәре бар, әлбиттә, ләкин уҡытыусы менән күҙмә-күҙ, йәнле аралашыуға етәме һуң! Балалар былай ҙа хәҙер тыуғанда уҡ компьютерҙы белеп тыуа, был уларҙы киләсәктә робот-кешеләргә әүерелдерә күрмәһен инде, тип борсолам.

**Робот-кешеләр, тигәндән, һеҙ нисек уйлайһығыҙ - күңелдәрен ана шул донъя ауы яулап алған бөгөнгө балаларҙың уҡытыусыһы кем һәм ниндәй булырға тейеш? Уҡытыусы абруйы ҡаҡшай төштө түгелме бөгөн?**

- Бер аҙ ҡәтғи яңғырар, бәлки, ләкин мин, һәр уҡытыусының абруйы уның үҙ ҡулында, тип әйткем килә. Әлбиттә, күп нәмә уҡытыусыны дәүләт яҡлауына ла бәйле. Уҡытыусы һөнәренең абруйын күтәреү, лайыҡлы хеҙмәт хаҡы, тейешле эш һәм йәшәү шарттары булдырыу бурыстары дәүләт ҡарамағында. Бик күптәргә, бигерәк тә ауыл уҡытыусыларына ғүмер буйы намыҫлы эшләһә лә почетлы исемдәр ҙә, дәүләт наградалары ла бирелмәй, стимул юҡ. Ә бына уҡыусы алдында үҙеңдең булмышыңды раҫлау, улар ихтирам итерлек дәрәжә яулау фәҡәт уҡытыусының үҙенә бәйле. Шундай итеп үткәр дәрестәреңде - донъяларын онотоп, һинең ауыҙыңа ғына ҡарап ултырһындар!

Был еңел түгел, һәм ул һәр уҡытыусының хәленән дә килмәй. Абруйлы уҡытыусы булыу - ул иң тәүҙә кешелекле булыу, тип аңлайым мин. Һәм, әлбиттә, белем кимәле, дөйөм интеллект ҡеүәһе лә әлеге абруй төшөнсәһен тулыландырып тора. Уҡыусыға ҡысҡырып өҫтәл һуғыу, баланы дәрестән ҡыуып сығарыу үҙеңдең көсһөҙлөгөңдө генә күрһәтә. Бала менән бер аҙ бала ла була белергә кәрәк, шул уҡ ваҡытта уҡытыусы икәнлегеңде лә онотorға ярамай. Әлеге лә баяғы, сама белеү, алтын урталыҡты һаҡлау кәрәк. Иң мөһиме - үҙ фәненә ҡыҙыҡһыныу уятыу. Предмет булараҡ тәүгә инә башлаған саҡта уҡ уҡыусылар алдына һорау һәм маҡсат ҡуям: нимә ул химия, ни өсөн беҙ бөгөн химияһыҙ йәшәй алмайбыҙ? Беҙҙе уратып алған бөтә нәмә химияға бәйле. Кем киләсәктә физик, биолог, медик, космонавт, инженер, нефтсе һ.б. булырға теләй, мотлаҡ химияны белергә тейеш. Балалар менән кеселекле мөғәмәләлә булырға күнеккәнмен. Дәрестә мин уларға исемдәре менән, йә булмаһа "улым, ҡыҙым" тип өндәшәм. Был улар тарафынан ниндәйҙер туғанлыҡ, яҡынлыҡ билдәһе тип ҡабул ителә. Уларҙың бәләкәй генә ыңғай ынтылыштарын да иғтибарһыҙ ҡалдырмайым, ваҡытында баһалайым, күңелдәрен үҫтерергә тырышам. Йүн сығырҙай өмөтлөләре менән ғүмер буйы ваҡытымды йәлләмәй ял көндәре лә шөғөлләндем һәм мотлаҡ бушлай. Һуңғы ваҡытта киң ҡолас алған репетиторлыҡ тигән кәсепте ҡабул итә алмайым. Эйе, ҡайһы берәүҙәр хәҙер уйлап та тормай уҡытыусы абруйын аҡсаға алыштыра. Уҡытыусылыҡ - ул кәсеп түгел, ә изге һөнәр икәнлекте оноталар. Октябрҙән алып уҡыу йылы аҙағынаса минең эш тәртибе шулай: ял көнө булһа ла барыбер иртәнге сәғәт 9-ға мәктәпкә киләм, балаларҙы олимпиадаға, Берҙәм дәүләт имтиханына әҙерләйем. Үҙ ғүмеремдә халыҡ-ара һәм Рәсәй кимәленә сыҡҡан бик күп призерҙар тәрбиәләнем. Улар ҡайҙарҙа ғына уҡымай һәм эшләмәй хәҙер. Араларында ғалимдар ҙа, танылған медиктар ҙа бар. Дөрөҫ, хәҙер был мәсьәләгә икенсе төрлөрәк ҡарайым, сөнки призерҙар араһында ла төрлөләре була. Ҡайһы берәүҙәр призерлыҡты баҫҡыс итеп алып, кеше була ла, илде ташлап китә, Ватанын онота. Мин хәҙер бындай амбицияларҙан азат булған, баҫалҡы һәм күберәк аҙ тәьмин ителгән ғаиләләрҙә үҫкән балаларға ярҙам итеү яғындамын, сөнки тап ошо мөхиттә ысын ҡиммәттәр аҡса менән баһаланмай. Минең өсөн иң мөһиме - баланы үҙ иленең патриоты итеп тәрбиәләү.

**Тәрбиә мәсьәләһенә килгәндә, ниндәйҙер бер осорҙан башлап мәктәп белем биреү һәм тәрбиә эшен айырып ҡарай башланы. Хәҙер был хаҡта бәхәскә инеү ҙә урынһыҙ һымаҡ тойола хатта. Тәрбиә нигеҙҙә ғаилә һәм урам ҡарамағында тороп ҡалды түгелме?**

- Асылда, белем биреүҙе тәрбиәнән бер нисек тә айырып ҡарау мөмкин түгел. Дөрөҫ, элекке комсомол, пионер ойошмалары эшмәкәрлеге кеүек мөһим бер звено төшөп ҡалды мәктәп тормошонан, әммә уны алыштырырҙай бер ни ҙә уйлап табылманы. Бая телгә алып киткән патриотик рух мәсьәләһе тап ана шул булалар ойошмаларының идеологияһы ине бит. Миңә ҡалһа, бөгөнгө мәктәптә белем биреүсе лә, тәрбиәсе лә - ул уҡытыусы, тип уйлайым. Уҡытыу-



***Йүн сығырҙай өмөтлөләре менән ғүмер буйы ваҡытымды йәлләмәй ял көндәре лә шөғөлләндем һәм мотлаҡ бушлай. Һуңғы ваҡытта киң ҡолас алған репетиторлыҡ тигән кәсепте ҡабул итә алмайым. Эйе, ҡайһы берәүҙәр хәҙер уйлап та тормай уҡытыусы абруйын аҡсаға алыштыра. Уҡытыусылыҡ - ул кәсеп түгел, ә изге һөнәр икәнлекте оноталар. Октябрҙән алып уҡыу йылы аҙағынаса минең эш тәртибе шулай: ял көнө булһа ла барыбер иртәнге сәғәт 9-ға мәктәпкә киләм, балаларҙы олимпиадаға, Берҙәм дәүләт имтиханына әҙерләйем. Үҙ ғүмеремдә халыҡ-ара һәм Рәсәй кимәленә сыҡҡан бик күп призерҙар тәрбиәләнем. Улар ҡайҙарҙа ғына уҡымай һәм эшләмәй хәҙер. Араларында ғалимдар ҙа, танылған медиктар ҙа бар. Дөрөҫ, хәҙер был мәсьәләгә икенсе төрлөрәк ҡарайым, сөнки призерҙар араһында ла төрлөләре була. Ҡайһы берәүҙәр призерлыҡты баҫҡыс итеп алып, кеше була ла, илде ташлап китә, Ватанын онота. Мин хәҙер бындай амбицияларҙан азат булған, баҫалҡы һәм күберәк аҙ тәьмин ителгән ғаиләләрҙә үҫкән балаларға ярҙам итеү яғындамын, сөнки тап ошо мөхиттә ысын ҡиммәттәр аҡса менән баһаланмай. Минең өсөн иң мөһиме - баланы үҙ иленең патриоты итеп тәрбиәләү.***

сы баланы үҙ абруйы аша һәм үҙ абруйы өлгөһөндә тәрбиәләй. Абруйы бар уҡытыусының балалары ла тәртипле, уҡыуҙа ла һынатмайҙар. Үҙемдә уҡыған балаларҙың холоҡ-ҡылығын, тәртибен улар мәктәпте тамамлағансы күҙәтеп, белешеп торам. Шулай бер уҡыусым өсөн ныҡ ҡына көрәшергә лә тура килде. Күренеп тора, химиянан һәләте бар, 8-9 кластарҙа олимпиадаларҙа ҡатнашып, юғары урын да яулаған. Тик бына уның эскелеккә битараф түгеллеге, тәмәке тартыуы асыҡланды. Ҡайны саҡ дәрескә ҡып-ҡыҙыл булып килеп инә был. Киттем өйөнә. Әсәһе улын яңғыҙы тәрбиәләй, үҙе лә тарта икән. Үсмерҙе тыуған көнөн билдәләгәндә эсереп өйрәткәндәр. Бик файҙаһы булманы был визиттың. Эш ҙурға китә башланы. Ахырҙа, был егет икенсе мәктәпкә күсергә мәжбүр булды. Ҡарай: унда ул бер кемгә лә кәрәк түгел. Ундағы дәрестәрҙә, аҙаҡ үҙе һөйләүенсә, китаптан күсертеп, конспект яҙҙыралар икән. Ҡайҙа эләккәнен анлағас, кире беҙгә ҡайтырға булды, ләкин директор уны ҡабул итергә риза түгел. Уҡытыусылар ҙа ҡаршы. Башымды эйеп, индем бер көн директорға. Кешелектән яҙмаһын бала, үҙемдең яуаплылыҡҡа алам, тип һүҙ биреп, ризалаттым, ләкин был эштең яртыһы ғына ине әле. Үсмерҙе яман ғәҙәтенән арындырып, аҙәм итеү өсөн бик күп көс түгергә тура килде. Уның ҡарауы, хәҙер Мәскәү дәүләт университетында уҡый, быйыл 5-се курста. "Тормош юлында әлдә Лиза Ҡыямовнаға осраным", - тип әйтеүен килтереп еткереүҙәре минең өсөн ҙур баһаға тиң булды.

Фатирымдан балалар өҙөлмәй, ҡайны саҡ аяҡ кейемдәрен ҡуйырға урын булмай китә. Уларҙы ашатам, бергәләшеп сәй эсәбеҙ, уҡыйбыҙ. Йортом тулы уйынсыҡ минең, бөтәһен дә ана шул балаларым бүләк итә, ҡайһыларын үҙ ҡулдары менән эшләгәндәр. Әле бына яңыраҡ Эльвира Курмаева менән Марина Максимова Американан каникулға ҡайтҡанда бәләкәй генә уйынсыҡ айыу балаһы тотоп килгәндәр. Уның түшендә асыҡ хәрефтәр менән ҙур итеп инглизсә "Theacher №1" ("Уҡытыусы №1") тип яҙылған. Был үҙенсәлекле бүләктең минең ҡушаматҡа тап килеп тороуы бик ирмәк булды әле ул. Элекке президентыбыҙ Мортаза Рәхимов республикала беренсе булып миңә "Халыҡ уҡытыусыһы" исемен бирҙе бит инде. Күрәһең, берҙән-бер булғас, үҙемде исәндә ҡалдырғандыр, ә бына фамилиямды онотҡан, осраҡҡан саҡта уйынлы-ысынлы итеп мине "номер один" тип йөрөтәр ине. Шаяртыуы шаяртыу ҙа, тик беренсе булыу - уйын түгел шул. Был бик яуаплы бурыс йөкмәтте, хәҙер бөтәһе лә миңә ҡарай, сағыштыра, эшемде күҙәтә. Тик мин бер ваҡытта ла почетлы исемгә ынтылманым. Асылым, булмышым нисек талап итә - шулай эшләйем һәм йәшәйем.

▶ **Уҡытыусы абруйын күтәреүҙә дәүләт кимәлендә лә хәстәрлек күреү кәрәк, тинек. Әле бына уларҙың эш хаҡы арттырылды. Ә Башҡортостанда, ғөмүмән, һуңғы тиҫтә йыл эсендә уҡытыусыларҙың белемен камиллаштырыу, һөнәр оҫталығын арттырыу буйынса байтаҡ эштәр башҡарыла. Мәҫәлән, "Йыл уҡытыусыһы" конкурстарын ғына алайыҡ...**

- Эйе, ошо хаҡта ла әйтермен тигәйнем, рәхмәт, иҫкә төшөрҙөгөҙ. Тәүҙәрәк бик матур, һөҙөмтәле булды ул "Йыл уҡытыусыһы" конкурстары, һүҙ ҙә юҡ. Тик тора-бара ул ниндәйҙер шоуға әйләнде. Конкурста ҡатнашасаҡ уҡытыусы әҙерлән дәрестәрен алып бара ла алмай, йыл буйына тип әйтерлек әлеге конкурсҡа әҙерләнә: тәүҙә район, унан баш ҡала, аҙаҡ республика этаптарын үтә. Күпме ваҡыт, кеше, аҡса йәлеп ителә был сараға! Бәлки, уны икенсерәк форматта ойоштороу хаҡында уйлашырға ваҡыттыр? Бер төрлөлөк ялҡыта бит. Унан мәғариф өлкәһендә етди реформалар, проблемалар заманында уҡытыусы эшмәкәрлеген баһалау критерийҙары ла үҙгәреп торорға тейештер бит?

▶ **Изге йолалар, традициялар хаҡында һүҙ сыҡҡас, һорамай булдыра алмайым: рухи тамырҙарығыҙ ниндәй ерлектән һут ала? Гәзит уҡыусыларға үҙегеҙ хаҡында бер кәлимә һүҙ әйтһәгеҙ ине.**

- Бала күңеленә изгелек орлоҡтары ғаиләлә һалына. Шөкөр, иманлы, тәрбиәле ғаиләлә үҫтем. Атайым Ҡыяметдин Мөхәмәтдинов Ҡыйғы районы Түбәнге Ҡыйғы ауылының указлы муллаһы улы. Ҡартатайым изге әүлиәләребеҙҙең береһе - Зәйнулла ишан хәҙрәттең шәкерте була. Аҙағыраҡ атайым да ошо "Рәсүлиә" мәҙрәсәһендә уҡый, Ҡөрьәнде яттан белә ине. Бынан тыш, атайым ғәрәп телен яҡшы белде, русса ла таҙа һөйләште. Яҡшылыҡ та, яманлыҡ та үҙеңә ҡайтыр, яҡшы бул, изгелек ҡыл, тип өйрәтер ине атайым. Дини һабаҡтар мәңгелеккә күңелемә һеңеп ҡалған. Өйөбөҙҙән кеше өҙөлмәне, атайыма кәңәш һорап та, Ҡөрьән уҡытырға ла киләләр, һәр йоманы йыйылышып беҙҙә уҡырҙар ине. Хәйер бирһәләр, атайым шуның яртыһын биреүсенең үҙенә кире ҡайтарыр ине. "Күп бирергә ярамай", - ти торғайны ул. Шуларҙы иҫләйем дә, бөгөнгөбөҙгә ҡарап иҫем китә. Хәҙер бит диндә лә кәсепкә, коммерцияға әйләндерҙеләр: сабыйға исем ҡушыу - шунса, никах уҡыу - шунса тора... Тотош бухгалтерия, прейскурант. Өйөнә саҡырып, аят уҡытҡан танышым бер дин әһеленең ҡылығына аптырап торҙо. Әҙ бирһәң, был бит бензинға ла етмәй, тип, биргән хәйергә риза булмай, өҫтәп һорай, ти. Нисек кенә булмаһын, бөтә ҡиммәттәрҙе лә аҡсаға тиңләү мөмкин түгел. Йәш быуынға бына ошо хәҡиҡәтте аңларға ярҙам итәйек, аҡса ҡолдары түгел, ә намыҫ ҡолдары булып үҫһендәр ине улар.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА әңгәмәләште.**

БАШ ҠАЛА ҠУНАҠТАРЫ

# КҮҢЕЛ МАТУРЛЫҒЫН...

## шәйләнеләр һәм баһаланылар

**Күптән түгел баш ҡалабыҙҙа булып үткән "XXI быуаттың мәғариф киңлегендә ислам идеалдары һәм ҡиммәттәре" тип аталған IV халыҡ-ара ғилми-ғәмәли конференцияға донъяның төрлө төбәктәренән бихисап дин һәм фән белгестәре йыйылғайны. Уларҙың күбеһе Башҡортостанға тәүге тапҡыр килгән. Улар баш ҡалабыҙ һәм республикабыҙ тураһындағы тәьҫораттары менән бик ихлас уртаҡлашты.**



**Мостафа Әхмәт Әли Ибраһим, Ислам донъяһы университеттары федерацияһының генераль директоры һәм йәмәғәт секретариаты рәйесе (Марокко):** Башҡортостан шундай гүзәл төбәк, күңелдә тик яҡшы тәьҫораттар ғына ҡалдырҙы. Иң тәүҙә матур итеп ҡаршы алғандары, яҡты йөҙ күрһәткәндәре өсөн бында йәшәгән халыҡҡа ҙур рәхмәтемде белдерер инем. Башҡортостан халҡы бик изге күңелле, йомшаҡ холоҡло. Өфө - ҙур, төҙөк, таҙа, матур ҡала, был ҡаланың киләсәге өмөтлө. Беҙгә "Ләлә" һәм Тукай урамындағы мәсеттәрҙә, Рәсәй ислам университетында, Башҡортостан мосолмандары диниә назаратында, Башҡорт дәүләт педагогия университетында, милли музейҙа булырға тура килде. Мәсеттәр беҙҙәкеләр менән сағыштырғанда бәләкәй булһа ла, шул тиклем нурлы, йәмле, уларҙан ниндәйҙер рухилыҡ бөркөлөп тора. Мәсеттәр ҙә, ислам университеты ла һеҙҙә ислам диненең ныҡлы нигеҙе барлығын, рухи мәҙәниәт камиллығын күрһәтә. Ислам университеты студенттары менән аралаштыҡ, уларҙың әҙәпле, тыйнаҡ, киң ҡарашлы булыуы, бер нисә сит тел белеүе миндә һоҡланыу уятты. Шуға күрә был университет дини кадрҙар тәрбиәләү, дөрөҫ ғилем биреү йәһәтенән мөһим әһәмиәткә эйәләр, тип һанайым.

**Хәсән Әхмәт Ибраһим, Халыҡ-ара ислам уйҙары һәм цивилизацияһы институты директоры (Малайзия):** Мин Рәсәйҙә өсөнсө тапҡыр, быға тиклем Мәскәү һәм Ҡаҙан ҡалаларында булырға тура килгәйне. Бына быйыл һеҙҙең баш ҡаланы ла күрергә насип булды. Һеҙҙең республика миңә бик оҡшаны, үҙемдең сәйәхәтемдән ҡәнәғәт ҡалдым. Бигерәк тә был илдең халҡы тураһында айырым әйтеп үтергә кәрәктер. Күп илдәрҙә булырға, төрлө халыҡ менән аралашырға тура килгәне бар, шулай ҙа иң матур күңелле халыҡ бында йәшәй икән, тигән ҡарарға килдем. Бөгөн заманалар үҙгәрҙе, цивилизация үҫеште, шуның менән бергә ер йөҙөндә йәшәгән халыҡ та үҙгәрҙе: үҙ-үҙенә бикләнде, ҡатыланды, ҡырыҫланды. Ә бына һеҙҙә аралашыусан, йомшаҡ күңелле һәм тырыш кешеләр йәшәй икән. Өфө ҡалаһы - йәшел ҡала, ҡайҙа ҡарама, таҙалыҡ, бөхтәлек күҙгә ташлана. Шуға күрәләр, бында һауа ла саф. Заманса яңы-яңы йорттар, бинадар төҙөлөүе был ҡаланың киләсәге ныҡлы икәнлеген раҫлай.

**Айшат САМЕДОВА, Төньяҡ-Кавказ институты ислам ғилеме һәм фәне үҙәгенең тәрбиә эше буйынса проректоры (Махачкала):** Һеҙҙең республикаға икенсе тапҡыр килеүем. Тәүге тапҡыр сит ергә барғанда, ғәҙәттә, башта өйрәнә алмай, аптыраңҡырап йөрөйһөң, ә бына Башҡортостанға тәүге тапҡыр килгәндә үк мин үҙемде үҙ йортомдағы кеүек хис иттем. Юлдарҙа әллә ни йөрөргә яратмаһам да, ошо ерҙең тупрағына аяҡ баҫҡас, күңелдә шундай тыныслыҡ барлыҡҡа килде. Ә инде кире ҡайтҡанда ата йорто менән хушлашҡан кеүек моңһоуландым. Ниңә ошондай тойғолар кисергәнемде әле лә аңламайым. Дағстанға ҡайтҡас, дини остазыма был турала һөйләп бирҙем. Ул миңә: "Әһин нисек теләгәйнең һуң? Шулай булыры билдәле бит инде!" - тине һәм сәбәбен һөйләп бирҙе, "Ул ил - изгеләр төбәге, унда башҡорт халҡының бөйөк улы, дин белгесе, рухи короле Зәйнулла ишан йәшәгән" тине. Баҡтиһәң, беҙҙең бөйөк суфый, дин белгесе Сәйфулла әфәнде Башларов Зәйнулла ишанда уҡыған, артабан үҙе лә дин таратыу өсөн уның рөхсәтен алған икән. Унан башҡа күп дини әһелдәребеҙ ҙә нәҡ Зәйнулла ишандан белем алған, ғилем эстәү нәиәте менән Башҡортостанға килгән. Ошо рухи ергеккә аяҡ баҫыуым күңелемдә тыныслыҡ уятҡан, шуға ла мин бында үҙемде үҙ йортомдағы кеүек хис иткәнмен икән. Ә был юлы, икенсе тапҡыр килгәнемдә, мин һеҙгә бигерәк тә ашҡынып килдем. Мине тағы ла шуныһы ғәжәпләндерҙе лә, һоҡландырҙы ла: һеҙҙең халыҡта ысын мосолман кешеһенә хас булған иң күркәм сифаттар һаҡланып ҡалған. Шул тиклем кешелекле, йомшаҡ күңелле, итәғәтле, ихлас, әҙәпле, тыйнаҡ. Үкенескә күрә, мосолман илдәре һаналһаҡ та, беҙҙә ошо сифаттар тулыһынса һаҡланып ҡалмаған, халыҡ бер аҙ ҡатыраҡ, тупаҫыраҡ. Бәлки, башҡорттарҙың тап шундай булыуы миңә лә рухи тыныслыҡ биргәндер. Уйланып йөрөй торғас, ни өсөн шулай икәнлеген аңланым шикелле. Һеҙҙең ата-бабаларығыҙ нисә быуаттар буйы ислам дине ҡанундары менән йәшәгән, ниндәй генә хәлендә лә уға тоғро ҡалған, бер ваҡытта ла динен, иманын һатмаған. Уларҙың изге күңеллелеге, йөрәктәрендәге ихласлығы, әхлаҡ ҡанундары һеҙгә лә күскән. Һеҙҙең күңелегеҙҙә ысын иман һаҡланған. Был бик мөһим. Хәҙер минең өсөн Башҡортостан рухи терәгемә әүерелде, иҫән-һау булһаҡ, тағы ла килербеҙ әле.

**Морат ШЕБЗУХОВ, Ҡабарҙы-Балкар республикаһы:** Башҡортостан, Өфө ҡалаһы тураһында быға тиклем дә ишеткәнем бар ине. Бына быйыл үҙемә лә аяҡ баҫырға насип булды был гүзәл илгә. Үҙемдең сәйәхәтем ваҡытында был ҡала һәм ундағы халыҡ тураһында тик яҡшы тәьҫораттар ғына тупланым. Өфө үҙенең төҙөклөгө, таҙалығы, йәшеллеге менән һоҡландырһа, халҡы ихлас, алсаҡ, эскерһеҙ, йомарт булыуы менән әсир итте. Бында йәштәр күп, уларҙың бер нисәүһе менән аралашырға ла тура килде. Улар алдынғы ҡарашлы, белемле, тырыш, аралашыусан. Баш ҡаланың иҫтәлекле урындарында булдыҡ. Башҡортостан - үҫешкән республика, шуның менән бергә бында тарихылыҡ та һаҡланып ҡалған. Боронғо Өфө урамдарындағы ағас йорттар үҙе үк тарих һөйләп торғандай. Шул йорттарҙы емермәгеҙ, мираҫ итеп һаҡлағыҙ, тигән теләгем дә бар, сөнки нәҡ шул йорттар янынан үткәндә баш ҡаланың тарихы, боронғолоғо менән ҡыҙыҡһыныу уяна. Ғөмүмән, республика шул тиклем оҡшаны, мөмкинлек булһа, киләсәктә тағы ла киләсәкмен.

**Гөлнәзирә АЙЫТБАЕВА яҙып алды.**

***✓ Ғариф, ысынлап та, йәш килендең йөҙөн тәүге тапҡыр күргәйне. Шәүрәнең ҡарлуғас ҡанатылай ҡыйылап торған ҡара ҡаштарын, оҙон керпекле, муйылдай сөм ҡара күҙҙәрен шунда уҡ абайлап алды көс-ғәйрәте ташып торған ир-ат заты.***




Никахтан һуң бер аҙна үткәс, Сәмиғулла ҡарттың ныҡышыуы буйынса Ғариф менән Мөслимәнең бергә йәшәй башлауын байрам иттеләр. Ғарифтың: "Беҙгә никахы ла еткән, ниндәй туй ти ул, еңгәмдең бит бер тапҡыр ағайым менән туйы булды", - тип әйтеүен атаһы ишетергә лә теләмәне. Туй икән туй... Байрамда Ғарифтың туғандары һәм башҡа ауылдаштар ғына булды. Сөнки Мөслимәнең ата-әсәһе әллә ҡасан уҡ гүр эйәләре булған. Берҙән-бер ҡустыһы - Шәрифйән йәп-йәш көйө йөрәктән сирләп, күрше ауылдан килеү түгел, хатта өйөнән дә сыға алмай, йәш кәләше тәрбиәһендә ята.

Туй ике өйҙә үтте. Ғарифтың атаһының йортонда - ирҙәр, ә Ғәлләмитдин мәрхүмдең өйөндә ҡатын-ҡыҙҙар йыйылды. Йәшерәк килендәр ике өйҙәге ҡунаҡтарҙы ла йүгереп йөрөп хөрмәт итте.

Ирҙәр өйөндәге ҡунаҡтар йыйылышып бөтөп, бер аҙ ҡымыҙ эсеп күңелләнеп алғас, Ғарифҡа һаулыҡ, оҙон ғүмер, бәхет теләнеләр. Олораҡтар ата-бабанан ҡалған йоланы тотоу мотлаҡ икәнен, өлкәндәрҙең һүҙен йығырға ярамағанлығын әйтеп үттеләр.

- Бына Ғарифйәнде әйтәм, бик афарин егет! Ғөрөф-ғәҙәтте боҙманы, еңгәһенең ҡуйынына инде лә китте...

- Әйтмә инде, ҡорҙаш, ата-бабанан ҡалған изге йола бит.

- Ә ниңә, Мөслимә килен дә бынамын тигән ҡатын әле. Түлдән ҡалмаған. Әле Ғарифйәнгә тупылдатып берәй ул да табып бирер...

Әммә өлкәндәрҙең әйткәндәре йәштәр араһында ултырған Ғарифҡа унын яраһына тоҙ һипкән һымаҡ тәьҫир итә ине. Башҡалар быны, әлбиттә, һиҙмәне.

Урта йәштәрҙәге Ғәлиәхмәт күрше күңелле генә итеп йырлап ебәрҙе:

*Беҙ бәләкәй саҡтарҙа*
*Һикереп мендек аттарға.*
*Ағай үлеп, еңгәй ҡалһа,*
*Ебәрмәнек яттарға.*

- Һай, афарин, кем Ғәлиәхмәт ҡустым, әйҙә, әйҙә, - тип уны дәртләндереп ебәрҙеләр. Ғәлиәхмәт дауам итте:

*Ағай үлһә - еңгәйҙең*
*Ҡуйынын һыуытманыҡ.*
*Ярты еңгәй - ҡәйнештеке*
*Тигәнде онотманы-ы-ыҡ,*

тип һуҙҙы ул йырының аҙағын. Барыһы ла геү килешеп йырсы Ғәлиәхмәтте маҡтаны.

Байрамса затлы кейем тышынан иңбашына уҡа менән биҙәлгән аҡ елән һалып ултырған Ғарифтың һис берәү менән һөйләшкеһе килмәне. Ғәлиәхмәт үҙенең йыры менән уны үртәгән һымаҡ тойолдо.

Ҡымыҙ эсеп алған ир-егеттәр кәйефләнгәнден кәйефләнә барҙы. Кейәү егетенең янында ултырған, ҡымыҙҙан күңелләнеп алған Сабир, дуҫының яурынына ҡулын һалып:

- Йә әле, Ғарифйән ҡорҙаш, үҙең берәй йыр һуҙып ебәр, булмаһа, - тине. Шуны ғына көтөп торғандай, кемдер матур итеп ҡурайҙа оҙон көй уйнап ебәрҙе. Ғариф та оҙаҡ көттөрмәне, бөтә ҡунаҡтарҙы үҙенә ҡаратып, моңло йырын һуҙҙы:

*Ерәнсәкәй атым ай елмәйҙер,*
*Кешегә ғүмер ике килмәйҙер.*
*Егет кенә саҡтың ҡәҙеркәйен*
*Диуана-ахмаҡ ҡына белмәйҙер.*

- Э-э-эй, - тип йәштәр унын йырын күтәреп алды.

Ғарифтың күҙҙәрен һағыш баҫҡан. Был байрам унын өсөн ҡайғы ине. Кешеләрҙең ни һөйләшкәндәрен, ни йырлашҡандарын башҡаса ишетмәне лә тиерлек. Был донъяның ғәҙелһеҙлегенә күңеле әрнеп, үҙ уйына сумды... Ысын һөйөү был донъяла бар тиҙәр. Ысынлап та, бармы икән?.. Әгәр булһа, ни өсөн Ғарифты ул ситләтеп үтте? Бер ҡасан да уға мөхәббәт тигән нәмәне татып ҡарарға яҙмағандыр, бәлки... Ә бәлки, ул Ғарифтың янында бик яҡын ғына йөрөгәндер ҙә, әммә ошо үҙ ихтыярынан тыш никахы уны башҡаса яҡынлашмаҫлыҡ итеп ҡауып ебәргәндер. Атаһының кирелегенә йөрәге әрнене. Ҡасандыр унын атаһы үҙе лә йәш булған бит. Моғайын, еңгә ҡуйынына көлөп-йырлап ҡына барып инмәгәндер, үҙе лә заманында бик ҡайғырғандыр. Ни өсөн шул ваҡыттарын атаһы онотҡан икән? Ни өсөн улының бәхетле булыуын теләмәй ул? Әллә ологая килә барса бәхет донъя малында, тип уйлай башлаймы икән кеше? Хәйер, атаһына тәүге кәләш алып биргән саҡта ул ни бары ун йәшлек бала ғына булған. Бер ни һиҙмәй, аңламай ҙа ҡалғандыр...

Мөслимә өсөн дә был туй күңелле булманы. Уға ла шатланырға урын юҡ ине. Үҙ тиңең менән тормош көтөргә яҙмағас, ҡәйнеш менән бәхетле булып буламы һуң? Исмаһам, йәш араһындағы айырма өс-дүрт кенә йыл булһасы! Бәлки, ҡәйнеште үҙенә ылыҡтырып та булыр ине. Улай ғына айырма булһа, әлбиттә, ҡәйнеше үҙе үк йүгереп килер ине шәй... Ә хәҙер, әлбиттә, ул турала уйларға ла ярамай. Барыбер ҡәйнеше уны үҙ итмәйәсәк. Мөслимә алдағы тормошон күҙ алдына килтерергә тырышты. Хәләл ефете янында ғына булһа ла, ысынында иһә, ул барыбер яңғыҙ буласаҡ. "Эй, ҡайным, нишләттең һин беҙҙе? Ғәлләмитдин баҡыйлыҡҡа киткәс, унын юҡлығына үҙем дә күнегеп бара инем. Хәҙер мине генә түгел, ә үҙеңдең ғәзиз улыңды ла бәхетһеҙ иттең", тип әсенеп уйланды Мөслимә...

Ирле - ҡатынлы булып һаналыуҙарына ҡарамаҫтан, Ғариф менән Мөслимә туйҙан һуң да, унан артабаныраҡ та айырым йоҡланылар. Кеше-маҙар яҡынтирәлә булмаған саҡта, үҙ-ара һөйләшкәндә, Ғариф - еңгә, ә Мөслимә - ҡәйнеш, тип өндәшер булдылар. Ә башҡа кешеләр алдында "атаһы", "әсәһе", тип һөйләшә торған булып киттеләр. Ҡәйнешенә Мөслимә башҡаса бер ҡасан да бәйләнмәне. Ғариф элеккесә үҙ аттары менән мәшғүл булды. Өй, хужалыҡ эштәрен Мөслимә алып барҙы. Ғөмүмән, икеһенең бер өй эсендә йәшәп ятҡанын иҫәпкә алмағанда, уларҙың ысынбарлыҡтағы тормошо элеккенән бер ни менән дә айырылмай ине. Тик икеһе лә иркенән мәхрүм...

Шундай тормош, бәлки, әллә күпмегә һуҙылыр ине, әммә көтөлмәгәндә Ғарифтың яҙмышы ҡырҡа икенсе яҡҡа боролдо.

* * *

Көндәрҙән бер көндө күрше Байыҡ ауылынан берәү килеп, Мөслимәгә Шәрифйән ҡустыһының хәл өҫтөндә ятҡанын хәбәр итеп китте. Былдай хәбәргә бик ныҡ ҡайғырған Мөслимә Ғарифтың ҡасан ҡырҙан ҡайтырын түҙемһеҙлек менән көттө.

- Атаһы, Шәрифйән туғаным бик ауыр хәлдә ята ти, - тип ҡапҡа тышына сығып уҡ ҡаршы алды ул Ғарифты. - Ауылдарына барып, хәлен белешеп киләйексе.

Ғариф еңел арбаға иң шәп атты - ҡоланы екте. Сәбиләгә йорт-ерҙе, Кәлимулланы ҡарап торорға ҡуштылар ҙа йәһәтләп Байыҡ ауылына юлландылар. Улар ауылға килеп ингәндә Шәрифйәндәрҙең өйө тирәһендә халыҡ йыйылғайны. Күбеһенсә - ир-ат. Ғарифты ла, Мөслимәне лә хәүефле уй биләп алды. Улар арбанан төшөүгә, өйҙән Шәрифйәндең ҡатыны - Шәүрә килеп сыҡты. Илай-илай йүгерә-атлап килеп ҡайынбикәһен ҡосаҡлап алды.

- Уф, ҡайынбикәм, Шәрифйән үлде лә ҡуйҙы бит! - тип һыңҡылдап илай-илай һөйләнде. - Мулла саҡыртып, ясин сығартып өлгөрҙөм алай ҙа. Хәҙер нишләрмен инде?

- Ярар, илама, килен, ни хәл итәһең инде. Көнө бөткәндер... - тип киленен йыуатырға маташты Мөслимә, үҙе лә илауын тыя алмай.

Мосолман йолаһы буйынса мәйетте оҙаҡ көттөрөп һалып ҡуйырға ярамағанлыҡтан, ҡәбер ҡаҙырға бөтә ауыл халҡы тиерлек ярҙам итте. Һис кисектереп тормаҫтан, йыназаһын уҡып, шул көндө үк ҡуйҙылар. Мәйет сыҡҡан өйҙә ул көндө аш табыны ойоштororға ҡушылмай. Шуға күрә лә уларҙың күршеләрендә аш йүнәттеләр. Уртанан киндер шаршау менән икегә бүленгән өйҙә ирҙәр - төпкө, ә ҡатын-ҡыҙҙар алғы бүлмәлә урынлашты. Барыһы ла мәрхүмдең ниндәй яҡшы кеше булғанын иҫкә алды. Ысын донъялағы урыны йәннәт булыуын теләнеләр. Ҡатын-ҡыҙҙар тол ҡалған йәш киленде ҡыҙғанды.

- Меҫкен Шәүрә килен хәҙер нишләр инде, йәшләй генә көйө яңғыҙ ҡалды. Ярай әле, ауырға уҙып өлгөрмәгән, бала-сағалары юҡ...

- Бер яңғыҙына донъя көтөүе лә бик ауыр булыр инде. Унын бит әле бер генә булһа ла һыйыры, өс-дүрт баш ваҡ малы бар. Кем уларға бесән әҙерләр...

- Хәйер, унын сирле ире өйөндә бер ни ҙә эшләй алмай торғайны инде. Донъя эше барыбер килен иңендә ине...

Быға саҡ әллә ни һүҙгә ҡатышмай ултырған Мөслимә:

- Киленде ситкә типмәм, Алла бирһә, үҙемә күсереп апҡайтып китәм, - тине.

Яулығы менән битен йәшергән килеш, бер ни ҙә өндәшмәй ултырҙы Шәүрә. Ҡайғынан аш ташырға ла, сәй яһарға ла унын хәле юҡ ине. Өйҙә бөтә эште башҡа ҡатын-ҡыҙҙар башҡарҙы. Йола буйынса, ашап-эсеүҙе оҙаҡҡа һуҙманылар, бер аҙҙан өйҙәренә таралыша башланылар.

Мәрхүмдең өсөн уҡытҡандан һуң, Мөслимә килененең ай-вайына ҡуймай, бар әйберҙәре менән уны күсереп алып ҡайтып китте.

- Ҡуйсы, килен, бер яңғыҙың был ауылда ҡалайтып йәшәрһең? Әҙ булһа ла мал-тыуарың бар. Уларҙы нисек ҡарарһың? Ул ғына ла түгел, килен, яңғыҙ йәшәгән йәш ҡатын-ҡыҙҙарға ен эйәләшә тиҙәр, Алла һаҡлаһын. Беҙ бит үҙ кешеләр, ҡыйырһытмабыҙ. Йортобоҙ иркен, Аллаға шөкөр, - тип теҙеп алып китте ҡайынбикәһе.

- Әлләсе инде, бикәм, уңайһыҙыраҡ булмаҫмы? - тине Шәүрә, яулығын аса биреп, Ғариф яғына ҡарай һалып алды.

- Булмаҫ, килен, һис тә уңайһыҙ булмаҫ, - тип илгәҙәкләнеп китте Мөслимә һәм килененең яуабын көтөп тә тормаҫтан, ихлас күңеленән матур-матур һүҙҙәрен теҙә-теҙә, унын өйөндәге барлы-юҡлы ҡаралты-маҙарын йыйыштыра ла башланы. Килененең йөҙөн күреү менән һушын юғалта яҙған Ғарифты әллә байҡаны, әллә юҡ...

Ғариф, ысынлап та, йәш килендең йөҙөн тәүге тапҡыр күргәйне. Ошо йәшенә етеп, шундай һылыу йөҙлө ҡатын-ҡыҙҙы бер ҡасан да күргәне юҡ ине. Шәүрәнең ҡарлуғас ҡанатылай ҡыйылап торған ҡара ҡаштарын, оҙон керпекле, муйылдай сөм ҡара күҙҙәрен шунда уҡ абайлап алды көс-ғәйрәте ташып торған ир-ат заты. Ошо муйыл күҙҙәр уны әллә сихырланы, әллә ни, Ғарифтың йөрәге күкрәк ситлеген йыртып сығырҙай булып, дөпөлдәп йыш-йыш тибә башланы. "Шундай ҙа сибәр ҡатынды ҡалдырып, теге донъяға китеп барсы инде..." тип һаман да Шәрифйән ҡәйнешен ҡыҙғанды.

Быҙауын эйәрткән һыйырын мөгөҙөнән бау менән арбаға тағып, һарыҡтарын алдан төшөрөп ҡыуып, өсәүләшеп ауылға ҡайтып киттеләр. Өйгә ҡайтып еткәнсе бер ни ҙә һөйләшмәнеләр. Тик һирәк-һаяҡ ҡына Ғарифтың "Йә, әйҙә, малҡай, фью-фить!", тип ат ҡыуған тауышы ишетелә ине...

Көн артынан көн үтте. Туған юғалтыу ҡайғыһы барыһында ла әкренләп онотола башланы. Мөслимә, элеккесә, үҙенең хужалыҡ эштәрен дауам итте. Ярайһы ғына ҙур донъяның барлыҡ мәшәҡәттәрен үҙ иңендә алып барыу өсөн ниндәйҙер ҡатын-ҡыҙҙарға хас булмаған ғәжәйеп бер һәләтлелеге бар ине унын. Өйҙәге ялсылар - Сабир һәм Сәбиләнең эштәре менән етәкселек итеү ҙә унын өҫтөндә булды. Хәйер, үҙҙәренең эштәрен улар бик белеп һәм урын еренә еткереп башҡарҙы. Шулай ҙа бер көн Мөслимә:

- Сабирйән туғаным, бесән мәле етә, салғыларыңды рәтләп ҡуй. Оҙаҡламай бесән сабырға төшөргә кәрәк, - тине. - Ана, Мәмбәтҡол байҙың ялсылары бөгөн иртүк тейәлешеп бесәнгә китте.

- Эйе, эйе, еңгә, үҙем дә тап ана шул турала уйлап тора инем, - тине һарыҡтарын ялан һарайға бикләп, киске ашҡа ҡайтҡан Сабир.

- Өмә итеп сапһаҡ, тиҙерәк булыр. Ана, күрше Миңлебай менән Ишмырҙаға ла әйт.

- Ярар, еңгә, әйтермен, - тине Сабир. - Көндөҙ һарыҡтар барыбер ашамай торалар. Ваҡытты бушҡа уҙғарырға ярамай шул. -Ҡатыны сәй әҙерләгән арала, лапаҫ аҫтында элеүле торған салғыларын алып, сүкей ҙә башланы.

Үҙҙәренең көндәлек күнеккән шөғөлдәре менән булған байбисә һәм унын ялсыларынан айырмалы рәүештә, Ғариф өсөн бөтөнләйгә ғәҙәти булмаған, тынысһыҙ көндәр башланды. Көндәр генә түгел, төндәр ҙә. Элегерәк яратҡан аттарына әүрәп, бар донъяһын онота алған Ғариф, өйгә Шәүрә килгәне бирле быға саҡ таныш булмаған тойғолар менән ғазаплана ине. Ҡайҙа ғына йөрөмәһен, йәш тол ҡатын унын уйынан сыҡманы. Шәүрә килендең сихри ҡарашлы күҙҙәрен тағы ла күргеһе килде. Бер өй эсендә йәшәүҙәренә ҡарамаҫтан, тәү күреүҙә үк үҙен әсир иткән шул күҙҙәрҙе һағынды. Әммә һәр саҡ яулыҡ бөркәнеп йөрөгән Шәүрә, нисектер, уға үҙенең йөҙөн башҡаса күрһәтмәне...

**(Дауамы бар).**

ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

# МОДА БАТШАЛЫҒЫНДА...

## башҡорт ҡыҙҙарының үҙ тәхете

**Ошо көндәрҙә республикала ғына түгел, ә Рәсәй фэшн-индустрияһы өсөн дә мөһим бер сара булып үтте. "Азияның супермоделе - 2011" халыҡ-ара конкурсы тарихында беренсе тапҡыр "Һылыуҡай" ижад студияһында шөғөлләнеүсе өс башҡорт ҡыҙына Рәсәй данын яҡларға тура килде. Ҡытайҙа ике аҙна дауамында үткән был конкурста беҙҙең ҡыҙҙар иң яҡшы моделдәр исемлегенә инеп, ике номинацияла еңеү яулап ҡайтты.**



"Азияның супермоделе" конкурсы Азияла иң абруйлы бәйгеләрҙең береһе иҫәпләнә. Конкурсҡа әлегеүе лә еңел түгел, бының өсөн иң тәүҙә эске кастинг үтергә кәрәк, был ойоштороусыларға бәйгегә тап азиат йөҙлө ҡыҙҙарҙы һайлап алырға мөмкинлек бирә икән. Шуныһы ҡыҙыҡ, студия эске кастингҡа 36 һылыуҙың фотоһын ебәрә, улар араһынан апалы-һеңлеле Айгөл менән Гөлсөм Айытколовалар һәм Илмира Ғәбитова ғына килеһе турға үтә. Ә башҡа ҡыҙҙарҙың тышҡы ҡиәфәте "үтә европалы" тип табыла. Команданы "Азия - 2004" конкурсы еңеүсеһе Альбина Мөхәмәтйәнова етәкләй.

Ҡытай, Япония, Малайзия, Корея, Һиндостан, Сингапур, Тайвань, Таиланд, Филиппиндар, Монголия һәм Вьетнамдан килгән титуллы моделдәр араһында беҙҙең ҡыҙҙар юғалып ҡалмай. Улар жюри ағзаларының ғына түгел, ике аҙна буйы конкурс барышын телевизорҙан күҙәтеүсе тамашасыларҙың алтмыш миллионлыҡ аудиторияһының күңелен яулап өлгөрә. Ҡыҙҙарҙы Ҡытай халҡының бик теүәл һәм дисциплиналы булыуы хайран ҡалдыра. Альбина Мөхәмәтйәнова әйтеүенсә, командалар һәм ойоштороусыларҙың төрлө телдә һөйләшеүенә ҡарамаҫтан, тәүге көндән үк әҙерлек эштәре башлана. Наньнин ҡалаһында үтһә лә, конкурсты ойоштороусылар, телевидениеға төшөрөүселәр бригадаһы, хатта йыйыштырыусылар ҙа Пекиндан саҡырылған була. Иртәнән кискә тиклем үткән репетициялар, алдан ентекләп уйланылған сценарий дүрт көн эсендә оло шоу әҙерләргә мөмкинлек бирә. Бынан тыш, ҡыҙҙарға был илдә һәр команданың диненә, милли йолаларына ихтирам менән ҡарауы оҡшай. Шулай уҡ милли кейемдәрҙәге дефиле - конкурстың һәр ваҡыт иң көтөп алынған һәм иң сағыу өлөшө иҫәпләнә.

Конкурста тәүге өс урынды Ҡытай ҡыҙҙары ала. Валентин Юдашкиндың мода йорто моделе Гөлсөм Айытколова үҙенең аралашыусан, асыҡ булыуы өсөн "Мисс Энергия" номинацияһына лайыҡ була. "Һылыуҡай - 2010" республика гүзәллек конкурсы еңеүсеһе Айгөл Айытколова Азияның иң яҡшы ун моделе исемлегенә инә.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**XX быуатты кемдер Атом бомбаһы быуаты, кемдер Мәғлүмәт заманы тип атаны һәм уларҙың һәр береһе үҙенсә хаҡлы икәнен танымайынса булмай. Шулай уҡ үткән йөҙ йыллыкты, яҡшымы был, насармы - Мода быуаты тип тә атап булалыр. Хәйер, беҙ һаман да Мода дәүерендә йәшәүебеҙҙе дауам итәбеҙ, ахыры: кутюрье һәм топ-моделдәрҙең исемдәре бөтөн донъяға яңғырай, яңы коллекциялар сәйәси саммиттарға ҡарағанда күберәк ҡыҙыҡһыныу уята, төрлө конкурстар ойошторола. Модель индустрияһы ла күп йәштәрҙе бөгөн үҙенә ылыҡтырыусы өлкә һанала. Шуның өсөн генә булһа ла бындай конкурста ҡатнашыуҙы бәхет итеп ҡабул итеүсе йәштәребеҙҙең уңыштары өсөн ҡыуана белергә лә кәрәктер. Бигерәк тә милли үҙенсәлектәргә, милли мәҙәниәткә ҙур урын биргән "Азияның супермоделе" кеүек бәйгеләрҙә ҡатнашыу башҡорт ҡыҙының Мода батшалығында үҙенең лайыҡлы урыны бар икәнлеген күрһәтә.**

**Ләйсән ДАЯНОВА.**

БЕҘҘЕҢ ЗАМАН ГЕРОЙЫ

# РОЯЛДӘН - ОПЕРАҒА



**Өфө дәүләт сәнғәт академияһы профессоры, композиция кафедраһы мөдире, Башҡортостан Республикаһының һәм Рәсәй Федерацияһының Композиторҙар берлеге ағзаһы, Рәсәйҙең Дмитрий Шостакович исемендәге премия лауреаты, Башҡортостандың һәм Рәсәйҙең атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре Ләйлә Заһир ҡыҙы Исмәғилева ижад иткән музыкаль әҫәрҙәр республикала һәм Рәсәйҙә генә түгел, Бөйөк Британия, Германия, Болгария, Румыния, Чехия, Белоруссия һ.б. алыҫ һәм яҡын сит илдәрҙә киң танылыу тапты. Башҡорт дәүләт опера һәм балет театры сәхнәһендә ҡуйылған "Хужа Насретдин" һәм "Арҡайым" балеттары өсөн ул Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһына лайыҡ булды.**

Үҙенең ижад юлын композитор "Роялдән - операға" тип атай. Тәүге музыка һабаҡтарын ул атаһы, билдәле композитор Заһир Исмәғилев Мәскәүҙә консерваторияла уҡыған йылдарҙа ала. Ҡыҙға һигеҙ йәш тулғас, ғаилә Өфөгә күсеп ҡайта. 15 йәшендә Ләйлә Заһир ҡыҙы Ҡазан консерваторияһы ҡарамағындағы музыка урта мәктәбенә уҡырға юллана, 1965 йылда Мәскәүгә консерваторияға уҡырға инеп, уны 1972 йылда тамамлай һәм Өфө дәүләт сәнғәт институтына эшкә ҡайта.

"Башҡортостандың урман-тауҙары, йылға-шишмәләре, туғай-болонлоҡтары, тәбиғәттең үҙе ҡурай моңон һәм үҙенсәлекле йырҙарҙы, бейеүҙәрҙе тыуҙырған. Башҡорттоң моңо, оҙон көйө ошо ерҙең үҙенән яралған. Башҡорт халҡы - үҙе бөйөк композитор, - ти беҙҙең заман геройы. - Тәүге нотамдан алып аҙаҡҡыһына тиклем мин башҡорт музыкаһын яҙһам да, унда совет осороноң Европа мәктәбе лә бар. Үҙемдә башҡорт ерлеген, тамырын ныҡ тойһам да, мин яҙған музыка атайымдыҡынан ныҡ айырыла. Сөнки атайымдың тамырҙары ергә нығыраҡ бәйле. Миндә лә шул уҡ тамыр, уның ҡаны тибә, тик мин шул тамырға таяның, донъя музыкаһы юҫығындағы фәлсәфәле музыка ижад итәм".

Композиторҙың һүҙҙәрен уның эштәре лә раҫлай. Мәҫәлән, быйыл Рәсәйҙә иғлан ителгән Испания йылы сиктәрендә ике илдең мәҙәниәт һәм сәнғәт вәкилдәре үҙҙәренең милли мәҙәниәте һәм сәнғәте ҡаҙаныштары менән таныштырып ҡына ҡалмай, ә әлеге ваҡытта йәшәргә хоҡуғы булған юғары художество кимәлендәге актуаль интернациональ ижади проекттарҙы пропагандалай. Шундай "Дуҫлыҡ йондоҙлоғо" халыҡ-ара арт-идеяһының үҙәк фигураһы булып Ләйлә Исмәғилева тора.

Быйыл февралдә Л. Исмәғилеваға халыҡ-ара арт-проект етәксеһе Елена Голуб испан темаһына балет яҙырға тәҡдим итә. Был идея һәм Еленаның сценарийы менән ҡанатланған композитор ҡыҫҡа ваҡытта - өс ай ярымда "Альгамбра розаһы" балетына музыка яҙа. Легендаға нигеҙләнгән әкиәти формалағы әҫәр мәңгелек кешелек ҡиммәттәре - изгелек һәм яуызлыҡ, ыҙалarҙан һуң мөхәббәттең тантана итеүе тураһында һөйләй.

Август һуңында Торревьеха ҡалаһында балеттың исем туйы һәм концерт ойоштороla. Унда Ләйлә Заһир ҡыҙының "Арҡайым" балетынан видео-фрагменттар күрһәтелә. Исмәғилева автор булараҡ ҡына түгел, үҙ әҫәрҙәрен башҡарыусы виртуоз булараҡ та сығыш яһай. Икенсе көнөнә Испанияның матбуғат саралары уны "рояль королеваһы", уның бармаҡтары "инструмент клавишаһы өҫтөнән осто", ә проект үҙе "монументаль, донъя кимәлендәге проект" тип баһалай. Балеттың премьераһын икенсе йылға Испанияла үткәреү планлаштырыла. Классик бейеү ятарыусылар балетты төрлө илдәрҙә интернеттан он-лайн режимында ҡарай ала.

"Классик музыканы тыңлағанда кешеләрҙең күңеле сафлана, сөнки бөйөк музыка Йыһан, Хоҙай менән бәйле һәм тап шул музыка классиканы тәшкил итә. Юғары музыканы аңлау һәм ҡабул итеү өсөн дә юғарылыҡ кәрәк", - ти Ләйлә Заһир ҡыҙы.

РОБАҒЫЙҘАР

# АРЫҪЛАНДАЙ БӘҺЛЕУӘН ДӘ...

## ахмаҡ булһа, азамат түгел

Сәхрә-Ҡыпсаҡ далаһының моңон эстем,
Уй һәм Мейәс,Яйыҡ-Урал һыуын кистем.
Тарихын уҡып, күҙ йәшемдә тыя алмайса,
Йылы тәнен Уралымдың ҡосоп яттым.

Майлы һаплы хәнйәр ҡулдан шыуып сыға,
Һабантуйҙа ғәйрәтте лә таһыл йыға.
Бүре, йәҙрә тейһә лә, йыраҡ ҡаса,
Нахаҡ һүҙгә күңел түҙмәй, әрнеп яна...

Көҙгө әтәс ҡысҡырһа ла, моңо булмай,
Ҡояшлы көн, емләһәң дә, балыҡ ҡапмай.
Еүеш бойҙай тартылһа ла, оно булмай,
Үрәпсеп, һикереп торған яу йыраҡ сапмай.

Йылыта ла, илата ла шырпы ҡабы,
Ҡулай булһын ҡулдарыңа балтаң һабы.
Ҡаш булмаһа, күҙҙең, йөҙҙөң нуры булмай,
Хисапһыҙҙың кеҫәһендә аҡса тормай.

Ҡыр кәзәһе һикерә-һикерә сабып бара,
Йәшлеккә лә, ҡартлыҡҡа ла ғүмер-ара.
Маҡсатыңа ирешә алмаһаң, аңларһыңмы,
Оло теләк, ныҡышмалыҡ һалмағаның?

Ике дошман ғауғалашһа һинең алда,
Әҙәп һаҡлап, уларға һин фекерең әйт.
Дошманыңдың береһе һинең дуҫҡа әйләнер,
Икенсеһе,элеккесә, дошман ҡалыр.

Ике дуҫың, туғандарың бәхәсләшһә,
Уйламайса һүҙ һөйләмә, береһен яҡлап.
Ике дуҫтың береһе һиңә дошман булыр,
Туғандарҙың береһе һиңә һалҡын ҡарар.

Баллы сәскәгә лә, һулыһа, ҡорттар ҡунмай,
Үҙ тәҡдирен Әүлиә лә бөтә белмәй.
Йәшлек әгәр кире килһә, тик бер аҙға,
Ғүмер ағышын борор инем башҡа яҡҡа.

Ҡорбан менән Оҙон күлдең араһы киң,
Күҙҙәреңә һөйөү менән ҡараған мин.
Ас булһаҡ та, туҡ булһаҡ та арҡабыҙҙан
Еребеҙҙең тупылдатып һөйгәне -беҙ!

Һыуһаниһәң, тоҙло һыу ҙа эселә бына
Унан аҙаҡ шишмә һыуын йотҡо килә.
Байлыҡ бит ул алдай торған нәфсе-ғәмәл,
Йотҡан һайын кеше белмәй сама ситен.

Һәр әҙәмдең ғүмеренең тауы була,
Тауға менгәс, тирә-яҡҡа бағып була.
Изгелекте, яманлыҡты күп ҡылдыңмы-
Ғүмер тауына менгәс, шуны белеп була.

Тауға менгәс, төшкө килмәй һис түбәнгә,
Был ләззәтте алыштырмам һис бүтәнгә.
Ғүмер еленә ҡаршы торор хәлдәрем юҡ,
Ә ағышын туктатырға әмәлем юҡ.

Төшәм инде, төшәм ғүмер тауҙарынан,
Түбән тарта тәҡдир ағышы билбауымдан.
Менеп булмаҫ микән башҡа көн үренә,
Ҡыртыш йыртып, һәр кем керә гүр түренә.

Ат йөрөгө ирҙе данлай үҙ ерендә,
Сәсән телде маҡтамайҙар үҙ илендә.
Була алмайым ике йөҙлө, ете күҙле,
Ғәйеплегә тура әйтәм уй-фекерҙе.

Саҡма әҙләйем ҡараңғыны яҡтыртырға,
Ут алырға, осҡон итеп саҡтырырға.
Шишмәләгән хәтеремдең соҡоп асып,
Тарихыңды, халҡым, үҙеңә ҡайтарырға.

Ауырлыҡҡа түҙгән кеше йөк күтәрә,
Ғәйрәтен самалаған - тоҡ күтәрә.
Ғәҙелекте аңлай белгән һүҙ күтәрә,
Етәксеһен бөйөклөккә ил күтәрә.

Утын ярһаң, унан байтаҡ тапсыҡ сыға,
Ҡош тоторға бесәй, һонолоп, ергә сүгә.
Даусы булған ҡорҙа һәр саҡ ғауға сыға,
Илдә лә шул, ә башҡалар ғазап сигә.

Бер-берендә таныу өсөн күҙ кәрәк,
Аңлашып йәшәү өсөн иһә зиһен кәрәк.
Үҙ-ара иғтибарлы, ихтирамлы булмай икән,
Ундай мөнәсәбәт, туғанлыҡ ниңә кәрәк?

**Спартак ИЛЬЯСОВ.**

ИНТЕРНЕТТАН



# ЗАМАН ТЕХНОЛОГИЯЛАРЫ... заман сирҙәрен булдыра

■ Бөйөк Британияның Нортумбрия университеты ғалимдары асыҡлауынса, сейә һуты күнекмәләрҙән һуң организмды элекке хәленә ҡайтарырға ярҙам итә. Тикшеренеүҙәрҙә 20 спортсы-марафонсы ҡатнаша. Табиптар уларҙы ике төркөмгә бүлеп, береһенә ике аҙна дауамында сейә һуты эсерә. Һөҙөмтәлә, уларҙың мускулдарында оксидатив стресс түбәнәйеү сәбәпле, сейә һуты эскән спортсыларҙың сәләмәтлеге күпкә яҡшыраҡ икәнлеге асыҡланған. Ғалимдар быны сейәлә антиоксиданттарҙың күп булыуы менән аңлата.

■ Күп сирҙәрҙе булдырмау өсөн көн һайын сырҙың ҡаты сорттарын ашау ҙа етә, тип белдерә фин ғалимдары. Финляндияның Турку университеты ғалимдары үткәргән тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, сырҙағы файҙалы бактериялар - пробиотиктар иммун системаһын нығытыуға булышлыҡ итә. Экспертар фекеренсә, сыр ашау бигерәк тә оло кешеләргә кәрәк.

■ Табиптар белдереүенсә, заман технологиялары күреү менән бәйле проблемаларҙың күбәйеүенә килтерә. Офтальмологтар күҙҙәрҙең төп дошманы тип компьютерҙы билдәләй, бөгөн хатта компьютерлы күреү синдромы тип аталған сир ҙә барлыҡҡа килгән. Кем көнөнә 5 сәғәттән артыҡ компьютер артында ултыра, уларға был сирҙең билдәләре яҡшы таныш. Күҙҙәр яйлап әсетһә, күҙ ҡабаҡтары ҡыҙарып, баш ауыртһа, борсолоу өсөн урын бар, ти табип-офтальмологтар. Күҙҙәр өсөн күреү мөйөшөн даими үҙгәртеп тороу кәрәк, йәғни улар йә алыҫҡа, йә яҡынға ҡарарға ярайлашҡан. Ә кем мониторға ғына текәлеп ултыра, уларҙың бындай мөмкинлеге юҡ. Тағы ла бер проблема - мониторға ҡарап ултырғанда кеше күҙҙәрен бөтөнләй тиерлек йоммай. Күҙҙәр даими дымланып торорға тейеш, юғиһә, улар кибә башлай. Тәмәке төтөнө, саң, газлы һауа шулай уҡ күҙҙәрҙе ҡоролоҡ барлыҡҡа килеүгә булышлыҡ итә. Офтальмологтарҙың төп кәңәше - сәғәтенә бер тапҡыр күҙҙәрегеҙҙе мониторҙан алып, 10 минут ял итеп алығыҙ.

■ Ғалимдар һәр магазинда ла һатып алып була торған йәшлек эликсирын асыҡлаған. Америка ғалимдары фекеренсә, һөмбаш, макрель һәм сардина балыҡтары майлы кислоталарға бай. Ғалимдар йөрәк ауырыуы булған 608 кешене тикшереп, омега-3 майлы кислоталары кешене ҡартайыуҙан һаҡлауын билдәләгән. Бындай кислоталар йөрәк өйәнәгенән һуң тиҙерәк һауығыу мөмкинлеге бирә, ҡартая барған һайын хәтер насарайыуы процесын аҡрынайта, күҙ ауырыуҙарын булдырмай. Майлы кислоталарға бай рацион әсәк яман шешә сире барлыҡҡа килеүҙе 40 процентҡа түбәнәйтә.

■ Британияның спорт журналы хәбәр итеүенсә, ултырып эшләү гипертонияға һәм диабетҡа килтереүе ихтимал. Бөгөн күп кеше 9-ар сәғәт буйына офиста ултыра, машинала йөрөй, һәҙөмтәлә, калориялар кәрәгенсә ҡулланылмай, аяҡ һәм арҡа мускулдары хәрәкәтләнмәй, метаболизм әкренәйә, умыртҡа бағанаһы һығылмалығын юғалта. Былар барыһы ла арҡа ауыртыуына, ҡан әйләнешенең насарайыуына килтерә, үпкәләр тулы ҡеүәтендә эшләмәү сәбәпле, организмға кислород етмәй башлай. Әгәр ҙә эштә көнө буйы ултырырға тура килһә, эшкә йәйәү йөрөргә, спортзалда шөғөлләнергә кәңәш итә табиптар.

ӘЙ, ЯҘМЫШ!

**Тәне ут кеүек янған ҡыҙымды ҡосаҡлап, табиптың нимә әйтәсәген борсолоу менән көтәм. Шул саҡ кемдеңдер ҡарашын тойоп, боролоп ҡарайым. Ишек төбөндә кескәй генә ике ҡыҙ баҫып тора. Йөҙҙәренең оҡшашлығына ҡарап, улар апалы-һеңлеле булырға тейеш. Кескәйҙәрҙең ҡарашында ҡыҙыҡһыныу, аптырау, ололарға ғына хас һағыш ятыуын күреп тетрәнеп киттем. Үҙ хәсрәтемде онотоп, ике ҡыҙсыҡтан күҙемде ала алмайым. Бөхтә кейенгән, тәрбиәле балалар булһа ла, йөҙҙәренә моңһоулыҡ шәүләһе ятҡан. Шул саҡ бер апай килеп: "Әйҙәгеҙ, балалар палатаға. Әсәләрҙең балаларын ҡосағына алыуын, иркәләүен күрһәләр, шаҡҡата ла ҡуялар, бахырҡайҙар", - тине. Уның һуңғы һүҙҙәре балаларҙың әсәй наҙынан мәхрүм икәнлегенә ишара булды.**

# КЕСКӘЙ ЙӨРӘКТӘРҘЕҢ...

## әсәй өсөн өҙгөләнгәне



Йәш, иғтибарлы, кескәйҙәрҙе әүрәтә-йыуата белеүе менән һоҡланыу тойғолары уятҡан педиатр Эльвира Фәрит ҡыҙы Латипова беҙгә мотлаҡ стационар дауаланыу талап ителеүен белдереп, барыһын да ентекләп аңлатҡас, инфекция бүлеге тормошо менән танышыу башланды. Бүлек хеҙмәткәрҙәренең эшен яратып башҡарыуы, ауырыуҙарға йылы мөғәмәлә күрһәтеүе бинаның тарлығын, шуға күрә үтә тынсыу булыуын ниндәйҙер кимәлдә ҡаплағандай булды.

Апалы-һеңлеле кескәйҙәрҙе әле бер, әле икенсе палата янында күрергә була ине. Уларҙың ишек төбөндә туҡтап, әсәләрҙең балаһын йыуатҡанын, ашатҡанын, иркәләгәнен ҡарап, оҙаҡ ваҡыт баҫып тороуҙары йөрәкте өҙҙө. Матур башҡорт исемдәрен йөрөткән, үҙҙәре лә сәскәләй ҡыҙсыҡтарҙы дауаханаға полиция хеҙмәткәрҙәре урамдан алып килә. Хозур тәбиғәтле ауылда йәшәгән ғаилә фажиғәһенең нигеҙендә - эскелек. Һәйбәт һөнәре булған дүрт бала әсәһе эскелеккә һабышҡан. Ғаилә башлығы ла бик һирәк айыҡ була. Әммә ул, үҙе аңлатыуынса, "ҡатынына үс итеп эсә". Ауылдаштары ирҙең ысынлап та айлап эсмәй йөрөгән саҡтары булыуы, әммә ҡатыны туҡтарға теләмәгәс, ҡабаттан башлауы тураһында һөйләне.

Кескәй ҡыҙҙарҙы дауаханаға килтергәндә уларҙың тәне себен-серәкәйҙән таланып, тире ауырыуы башланған була. Ҡыҙсыҡтарҙы инфекция бүлеге хеҙмәткәрҙәре көн һайын йыуындырып, дауалап, аяҡҡа баҫтыра. Кескәйҙәрҙең әсә ҡарауынан мәхрүм булып, яланғас көйөнсә урам гиҙеүе, ас-яланғас йәшәүе асыҡлана. Йөҙҙәренә нур йүгергән ике балаға бүлек хеҙмәткәрҙәре кейем, уйынсыҡтар бүләк итә, әсәләрсә хәстәрлек менән тәрбиәләй. Күпмелер ваҡыт үткәс, дауаханала ҡыҙҙарҙың әсәһе пәйҙә булды. Өлкән ҡыҙының уны ҡосаҡлап, тышҡа уйнарға сыҡҡан балаларға "Минең дә әсәйем бар!" тип тантаналы ҡараш ташлауы, унан әсәһен ебәрергә теләмәй илауы бар бүлеккә хәсрәт һөрөмә япты. Эсеүен ташлап, эшкә урынлашып, балаларын алып ҡайтырға вәғәҙә биргән әсә ошонан һуң бер мәртәбә генә килде. Уныһында ла ул... иҫерек ине.

Ҡыҙҙарҙы оҙайлы ваҡыт дауаханала йәшәтеп булмай ине, әлбиттә. Бер көндө уларҙы Сибай социаль приютынан алырға килделәр. Эске кейем менән генә килгән ике кескәйҙең икешәр ҙур пакет кейем-һалымы, уйынсыҡтары йыйылған булып сыҡты. Әле ике йәше лә тулмағаны ниҙер тәтелдәй-тәтелдәй алты йәшлек апаһы артынан йүнәлде. Ә өлкәне үҙен оло һөйөүгә, мөхәббәткә сорнаған инфекция бүлеге хеҙмәткәрҙәренән айырылыуын һиҙеп, машинаға теләр-теләмәҫ кенә инеп ултырҙы. Бәләкәс ҡулдарын болғай-болғай, тәҙрәгә ҡапланған ҡыҙсыҡтарҙы оҙатҡан медицина хеҙмәткәрҙәре лә, дауаланыусылар ҙа күҙ йәштәрен тыя алманы. "Әсәләре хәҙер килеп әләкһә, күрәген бирер инем", - тиеүселәр ҙә булды.

* * *

Үкенескә ҡаршы, был ике кескәйҙең яҙмышын ҡабатлаған балалар бик күп. Ошо уҡ инфекция бүлегенә бер йәшлек малай килтерелде. Ул да әсәһе эсеп йөрөгәндә ҡарауһыҙ ҡалып, аслыҡтан хәлһеҙләнеп ауырыуға һабышҡан. Уның да өҫтөндә кейеме булмай сыҡты. Малай ҙа, бүлек хеҙмәткәрҙәренең тырышлығы менән, кейем-һалымлы, уйынсыҡлы булды. Ашатып, тамағын туйҙырып йоҡлатҡас та тәнәйҙең төшөндә "Мама, мама" тип һаташыуы, кескәй ҡулдарының ҡайҙалыр йөрөгән әсәһен эҙләүе күңелдә ауыр тойғолар ҡалдырҙы.

Ниңәлер һуңғы осорҙа республикала ата-әсәле тере етемдәр йәғни ҡарауһыҙ балалар күбәйә. "Орленок" лагерының бер заезында ғына шундай алты баланы күрергә тура килде. Уларҙы ла тәүҙә дауаханала тотҡандар, унан лагерға алып килеп урынлаштырғандар. Алты йәштән 15 йәшкә тиклемге был ҡыҙ һәм малайҙарҙы балалар йорто көтә. Ә шул уҡ ваҡытта уларҙың һәр береһенең атаһы ла, әсәһе лә, башҡа туғандары ла бар. Лагерь тәрбиәселәре иһә уларға нимә кейҙерергә (сөнки ойоҡбаштары ла юҡ) белмәй аптыранды. "Улар башҡа балалар менән аралашып, ғаиләләренә килгән ҡайғы хаҡында онотаалар. Әммә икенсе ҡыҙҙар һәм малайҙарға ҡыҫтәнәҫтәрен тейәп, ата-әсәләре килеп төшһә, күңел төшөнкөлөгәнә бирелеләр. Әлбиттә, улар ҙа ата-әсәһен һағына, ә алдағы билдәһеҙлек был балаларҙы хафаға һала, кескәй йөрәктәрен әрнетә", - тине тәрбиәселәр.

Эйе, тәү ҡарашҡа ҡарауһыҙ кескәйҙәрҙе балалар йортона ебәреү уларҙы берҙән-бер ҡотҡарыу юлы булып күренә. Әммә ҡыҙҙар һәм малайҙарҙың тыуған йортонан, ғәзиз әсәһенән (ниндәй генә булһа ла әсәй бит ул!) айырылырға теләмәүен дә онотоорға ярамай. Унан балалар йортонда тәрбиәләнеүселәрҙең йыш ҡына үҙаллы тормошта юғалып ҡалыуын, юлдан яҙыуын да онотмайыҡ. Шуға күрә ҡарауһыҙ балаларға мотлаҡ социаль приют асырға кәрәк. Беҙҙең Баймаҡ районы өсөн дә ул бик актуаль проблема. Сөнки төнөн иҫерек ата-әсәнән айырып алынған, асяланғас балаларҙы үҙәк ҡала дауаханаһына алып килеү проблемаһы хәл итмәй, киреһенсә, медицина хеҙмәткәрҙәре өсөн өҫтәлмә мәшәҡәт тыуҙыра. Балаһы приютта булған ваҡытта ата-әсәләрҙе ныҡлы контролгә алып, уларҙы алама ғәҙәтенән арындырыу, эшкә урынлаштырыу мәсьәләләре ҡаралһа, бала тыуған йортонан айырылмаҫ, тере етем булмаҫ ине.

Шулай ҙа ике кескәй ҡыҙсыҡтың да, бер йәшлек малайҙың да, тыуған йортонан ҡасып дауахананан лагерға күсеп йөрөргә мәжбүр булған балаларҙың да ата-әсәләре аҡылына килер, тип ышанғы килә. Хатта йыртҡыстар ҙа сабыйын әсе яҙмыш еленә ҡалдырмай бит...

Гүзәл ИҪӘНГИЛДИНА.

БАҠСА

# ЕЛӘК ҮРСЕТЕҮ...

## һәм йәшелсә үҫтерәү серҙәре

**Өс йыл элек, аңыртып ебәреү өсөн, баҡса еләген ике урынға ултырткайным. Берейһен тәрбиәләп, йышлап китмәһен өсөн мыйыҡтарын ҡырҡып, араларын йомшартып торҙом. Икенсе түтәлгә ҡул етмәгәс, балаҫ кеүек булып үҫте. Шулай ҙа унда сүп үләне үҫтермәй утап, һыу һибеп торҙом.**

Быйыл быйыл ошо "балаҫ"тан теге түтәл менән сағыштырғанда 3-4 тапҡыр күберәк еләк алдым. Ошондай уҡ хәл балаларым бәләкәй саҡта бер булғайны. Хатта еләктәрен гел ҡарап торған күршем үпкәләп йөрөгәйне. Ул саҡта эш еләктәрҙең сортында йәки тупраҡтың уңдырышлы булыуындалыр, тип уйлағайным. Улай түгел икән шул. Йыш үҫкән түтәлдә еләктәр ҡоро йылда ла бер-береһенә ышыҡ булып, артыҡ бирешмәй. Ә айырым-айырым ултырғандарының тамырҙары өҫтә генә булғас, тиҙ генә ҡорой башлай. Үҙемдең тәжрибәмдән сығып, мин шундай һығымта яһаным, ә һеҙ үҙегеҙ ҡарағыҙ, хөрмәтле гәзит уҡыусылар. Сортына килгәндә, минең еләктәремдең күбеһе - "Фестивальная".

Виктория еләген - биш, ә ҡурай еләгенең 8-9 йыл һайын урындарын алыштырып торам. Улар өсөн элек һарымһаҡ, әнис йәки бәйгәмбәр тырнағы сәскәһе үҫкән урынды һайлайым. Был урындарҙа ҡоротҡостар булмай. Ерҙе йомшартып, янған тиреҫ, минераль ашламалар, әҙ генә эзбиз индереп, сүп үҫтермәй тырматып торам. Ҡурай еләген сентябрь аҙағында, бик өлгөрмәй ҡалһам, иртә яҙ ултыртам. Ҡурай еләге үгәй инә үләне үҫергә яратҡан урындарҙы үҙ итә. Хәлдән килгәнсе көҙҙән күп итеп һыу һибеп ҡалдырам, шунан улар сәскәгә тумалана башлағас, һыу һибәм. Уңышын йыйып алғансы һыу һибеп торһаң, ҡурай еләге күберәк була. Баҡса еләге лә һыу ярата. Викторияны һыуыҡтар төшмәҫ элек тамыры нығынып өлгөрөрлөк итеп ултыртам. Әгәр йәй күсереп өлгөрмәһәм, сентябрҙә ултыртам. Ҡояш та үтә ҡыҙҙырмай, ямғырҙар ҙа йышыраҡ яуа, шуға улар бик яҡшы тына үҫеп китә.

Картуфты бик иртә ултыртһаң, уға колорадо ҡуңыҙҙары ябырыла. Шулай уҡ картуф сығып өлгөрмәгән булһа, был ҡуңыҙҙар помидор менән баклажан үҫентеләренә лә һөжүм итеүсән. Шуға картуфты бөтә күршетирәләрегеҙ ултыртып бөткәс кенә сәсегеҙ, был осраҡта ҡуңыҙҙар артыҡ күп булмай. Голланд картуфын колорадо ҡуңыҙы яратмай. Был картуфтың һабағы ҡара көҙгә тиклем йәшел була, шуға ла унда ҡуңыҙҙар көҙ генә барлыҡҡа килһә лә, картуфҡа зыян килмәй. Шуға ла ағыу һипмәй генә картуф үҫтерәм, тиһән, голланд картуфын ултырт. Картуфтың был сортын һирәгерәк сәсергә кәрәк, сөнки уның һабағы оҙон булыу сәбәпле, бер нисә тапҡыр күмеп торорға тура киләсәк. Картуфы эре була, әммә әллә ни тәмле түгел, шулай ҙа ашарға мөмкин.

Ултыртҡан үҫенте насар үҫһә, тимәк, ере килешмәй. Икенсе йыл бүтән урынға ултыртып ҡарағыҙ, сөнки төрлө үҫемлектәрҙең үҫеше ерҙең составына ла бәйле.

Ваҡ орлоҡтарҙы көҙҙән ултыртып ҡалдырһам, түтәлдәрен көндәр йылыраҡ ваҡытта әҙерләйем, һыуыҡта баҡсала оҙаҡ булышып булмай. Ләкин орлоҡтарҙы көндәр һыуығас сәсәм. Йылы булһа, көҙгө ямғырҙарҙа орлоҡтар көҙҙән үк шыта башлап, боҙола. Кишер орлоғон бигерәк һуң сәсәм, ул һыуыҡҡа бирешмәй. Тик көҙҙән сәскән кишер орлоҡтарының барыһы ла ҡар ирегәс, ҡатҡан түтәлде тишеп сыға алмай. Шуға ла иртә яҙ түтәлдең өҫтөн тырма менән иплап кенә һуҡҡылап, йомшартып ҡуям. Яҙ ҡоро килһә, һыу һибергә лә кәрәк.

Октябрь айында ергә ҡойолған япраҡтар араһына ҡоротҡостар йыйылмаһын өсөн, уларҙы ергә күмеп ҡуям. Япраҡтары ҡойолғас, уңышты яҡшы биргән ҡарағаттан бер йыллыҡ сыбыҡсаларҙы 20 сантиметр оҙонлоҡта ҡырҡып алып, ер өҫтөнә 1-2 бөрө ҡалдырып, дымлы тупраҡҡа күмеп ҡуйһаң, икенсе көҙгә ул бына тигән үҫенте була. Тик йәй буйына онотмай ғына һыу һибеп тороғоҙ, сөнки ҡарағат һыуҙы ныҡ ярата, тамырын нығыта. Киләһе көҙгә тәғәйенләнгән урынға күсереп ултыртып ҡуйырығыҙ.

**Флора БИКЕМБӘТОВА.**

МӨҒЖИЗӘЛӘР ЗАМАНЫ



# КОСМОЭНЕРГЕТИКА ҺӘМ СӘЛӘМӘТЛЕК



### Сеанстар тураһында

**Сеанстар индивидуаль дә, коллектив та була ала. Икенсеһе яҡшыраҡ, сөнки сеанстарҙың һөҙөмтәлелеге юғары - каналдарҙың тығыҙлығы көслөрәк була. Сеанстарҙың дауамы - 40-45 минут.**

Энергетик бысраҡтан арынырға теләгән кеше аңлы рәүештә тулы гармонияға ынтылырға тейеш. Сеанстарҙы үткәреү методикаһы бер нисә үҙенсәлеккә эйә:

**Беренсенән, был оҙайлы терапия бер нисә тиҫтә сеанстан тора!** Барлыҡ ағзаларҙы ла тергеҙеү, барлыҡ ауырыуҙарҙан һәм проблемаларҙан арыныу өсөн ваҡыт кәрәк. Ә хәлтороштоң яҡшырыуы, гәҙәттә, бик тиҙ була. Ауыр сирҙәрҙән - онкологиянан, ен эйәләшеүҙән, наркоманлыҡтан, хроник алкоголизмдан һ.б. дауаланыуға сеанстарға көн һайын һәм оҙаҡ йөрөргә кәрәк (һүҙ тулыһынса һауығыу хаҡында бара). Дауаланыу курстар менән үтә. Бер курс, яҡынса, 10 сеанс, артабан бер-ике айға тәнәфес (дауаланыу отпускыһы), һуңынан артабанғы курс. Кеше менән эшләү дауалау сеанстары ваҡытында бара. Әммә тәнәфес ваҡытында ла дауам итә, кешелә ауыртыу, кире тойғолар ҡабатланырға йәки барлыҡҡа килергә мөмкин. Тәүге аҙнала энергияларға яйлап өйрәнеү, ауырыуҙар кинәт киҫкенләшмәһен өсөн өс контактһыҙ сеанс үтеү тәҡдим ителә. Контактлы сеанстарҙа дауалаусы ҡулын чакраларға, кәрәк икән, ағзаларға ҡуйып эшләй.

Икенсе аҙнанан аҙнаһына ике сеанс та етә. Ә икенсе курстан башлап - аҙнаһына бер сеанс. Йәғни сеанстарҙың ваҡыты һуҙыла. 30 сеанс алыу өсөн һеҙгә 10-11 ай, йәғни бер йыл кәрәк буласаҡ. Каналдарға башта һеҙҙең эфир тәнегеҙҙе нормаға килтереү өсөн ваҡыт кәрәк буласаҡ, һуңынан физик ағзаларығыҙ нормаға ҡайтыр. Регенерация - оҙайлы процесс. Сеанстарҙың тәҡдим ителгән схемаһы кешенең проблемаһына ҡарап үҙгәреүе лә мөмкин. Күп сеанс үтеүҙе бәрәү ҙә тыймай, ә камиллыҡтың сиктәре юҡ. Проблемағыҙ бөткәс, профилактика өсөн, рецидив булмаһын өсөн һирәк кенә йөрөргә лә мөмкин. Иң мөһиме - аураны ҡабаттан бысратмау. Сер итеп кенә әйткәндә: 10 сеанс кешене бер йылға йәшәртә!

**Икенсенән, сеанстар аяҡ өҫтө үтә.** Дауаны ултырып та, ятып та алырға мөмкин, әммә был осраҡта ҡеүәте кәмерәк була. Бөтөн сеанс буйына күҙҙәрҙе йомған килеш, физик һәм рухи көсөргәнештән арынып, аяҡ өҫтө торорға кәрәк. Үҙеңде тыйырға һәм ағымға ҡаршы торорға ярамай: бәүелтә икән - бәүелегеҙ, көлдөрә икән - көлөгөҙ, иҫнәтһә - иҫнәгеҙ, әммә ауыҙығыҙҙы ябмағыҙ һәм тештәрегеҙҙе ҡыҫмағыҙ (иҫнәү аша кире энергия сыға).

Әгәр умыртҡалыҡта проблемалар булһа, гәҙәттә, ҡайҙалыр бора башлай, шул ваҡытта нимәлер шыртлауы ла мөмкин, тимәк, дискылар урынына ултыра. Өҫкә тартырға мөмкин - ҡыҫылған нервыны азат итәләр һәм шунда уҡ радикулит үтеүе мөмкин. Шул уҡ ваҡытта һеҙ тулыһынса үҙ аңығыҙҙа булаһығыҙ (был гипноз түгел). Бөтөн энергетик бысраҡ һеҙҙән аҫҡа- ергә үҙегенә, ҡайтанан эшкәртелергә ағып төшә. Шуға күрә ҡулдарҙы ҡаушырырға, билгә таянырға ярамай (бысраҡты ҡабат үҙебеҙгә алмаҫ өсөн). Сеанс ваҡытында, бигерәк тә беренселәрендә, аяҡ-ҡулдарҙа ауырлыҡ тойолоуы, улар сәнсеп алыуы ихтимал, тимәк, бысраҡ энергия сыға. Етерлек сеанстар алғас, осоу тойғоһо, Йыһанда ирәү тойғоһо тыуыуы ихтимал. Был нескә тәнсәләрҙең юғары дәрәжәһе. Сеанстан һуң әҙерәк ултырып тороғоҙ, аяҡ табандарында сәнсеү дауам итеүе бар - энергетик бысраҡтың ҡалғаны сыға. Әгәр сеанс ваҡытында йәшегеҙ аға икән, тимәк, астраль тән (эмоциялар һәм теләктәр тәне) таҙара, йыйылған үпкәләүҙәр китә. Шуға күрә, әйҙә, рәхәтләнеп илағыҙ.

**Рауфан МОРТАЗИН.**
**(Дауамы бар).**

УҢЫШ ҠАҘАН



# БӘХЕТКӘ УН АҘЫМ

## Бөгөнгөнө һәм иртәгәне яҡшы ит

Кисен йоҡларға ятҡас, беҙ ваҡыты-ваҡыты менән иртәгәһе көнөбөҙ нисек булырын күҙалларға тырышабыҙ. Бәлки, мөһим кәңәшмәлә ҡатнашып, унда яҡшы итеп сығыш яһарғалыр? Бәлки, осрашыуға барып, үҙем тураһында яҡшы тойғо ҡалдырыу мөһимдер? Шулай уҡ ниндәйҙер проектты ваҡытында тапшырыу йәки башҡа эшлекле маҡсаттарҙы тормошҡа ашырыуҙы планлаштырыуың да ихтимал. Тик... бөтә был пландар бер нисә сәғәт таттлы йоҡонан баш тартыу өсөн сәбәп була аламы?

Әгәр һеҙ аңығыҙҙың башҡа һыймаҫлыҡ көсөн аңлаһағыҙ, былай эшләмәйәсәкһегеҙ. Бары тик күҙҙәрегеҙҙе йомоп, өс тапҡыр тәрән итеп тын алып, иртәгәһе көндөң хәл иткес ваҡиғаларын визуаллләштерәсәкһегеҙ. Уйығыҙҙан ғына тап һеҙ теләгәнсә барасаҡ яҡшы күренештәрҙе күҙаллағыҙ. Әммә бындай күнекмәнә гәҙәттәге: "Мин ысынбарлыҡҡа ҡайтам", - тип түгел, ә: "Әйҙә, шулай булһын", - тип тамамларға кәрәк.

Был процедураны бер ауырлыҡһыҙ башҡарһағыҙ, бындай программалаштырыу менән көн һайын кисен файҙалана һәм үҙегеҙгә матур иртәгәһе көн тәьмин итә алаһығыҙ. Йоҡлар алдынан күҙҙәрегеҙҙе йомоғоҙ һәм өс тапҡыр тәрән итеп тын алығыҙ, һуңынан иртәгәһе көндәге ваҡиғалар тураһында "фильм" ҡарағыҙ. Уйығыҙҙағы картинаға иртәгә йоҡонан торғандан алып һәр сәғәт нимә эшләйәсәгегеҙҙе календарь формаһында индерегеҙ.

Беренсе күренеш: ғаиләгеҙ иртәнге ашҡа йыйыла. Һеҙҙең арала гармониялы мөнәсәбәт хакимлыҡ итә. Был - көндөң яҡшы башланғысы. Уйығыҙҙа ғына сәғәт телдәрен иртәнге һигеҙгә күсерегеҙ: ваҡытында эшегеҙгә барып етеү өсөн өйгөҙҙән сығаһығыҙ. Ғаилә ағзаларығыҙҙың йөҙөндә "йылмайыу" күрергә онотмағыҙ - улар ҙа тәғәйен урындарына ваҡытында барып етә.

Хәҙер сәғәт телдәре туғыҙҙы күрһәтә. Һеҙ эш урынында. Барлыҡ хеҙмәткәрҙәрҙең дә энергияһы ташып тора, улар эшләргә әҙер. Һеҙ беләһегеҙ: был көн бик емешле буласаҡ. Иртәнге ун: кәңәшмә (йәки һеҙ тәү сиратта башҡарған икенсе берәй эш) бик яҡшы үтә. Сәғәт ун бер: барыһы ла үҙ эше менән мәшғүл. Көн уртаһында яңы заказ биреүсе килә йәки һеҙ төшкө ашҡа китәһегеҙ (был көн тәртибенә тап иртәгә йәки башҡа ваҡытта булырға тейешле мөһим эштәрҙе ҡуйығыҙ).

Төшкө аш: аштар ҙа тәмле, фекер алышыу ҙа яҡшы бара. Сәғәт ике: һеҙ һәм коллегаларығыҙ яҡшы һөҙөмтәләргә ирешәһегеҙ. Сәғәт өскә был ҡаҙаныштар тағы ла яҡшыра. Дүрттә... Моғайын, иртәгәһе көнөгөҙ нисек булыры тураһындағы "фильм"ды үҙегеҙ ҙә күҙаллағанһығыҙҙыр инде.

Уйҙағы "кинофильм" иртәгәһе көнөгөҙҙөң нисек үтәсәге яҙылған ҡаралама булып тора, сөнки тап уйҙар киләсәккә нигеҙ һала. Хәҙер инде нисек итеп матур аҙна, уңышлы ай, һәйбәт йыл, иҫ киткес тормош программалауҙы ентекле аңлатып тороу кәрәкмәйҙер, тип уйлайым.

**Роберт Стоун.**

БАШ ЭШЛӘТМӘК

# ИМАНЫҢА ТОҒРО ҠАЛҺАҢ...



**1.** Уға ынтылдым да
Ваттым ләхет таҡталарын,
Аса ғына алманым шул
Донъялыҡтың (...)ларын.
*(Әхмәр Үтәбай).*

**2.** Үҙ артынан әсәйемде тартҡан
Күҙ алдынан китмәй ҡарындаш.
Ул һүҙ инде аҫыл таштай түгел.
Күңелемдә ятҡан ауыр (...)
*(Рәмил Ҡол-Дәүләт).*

**3.** Ер әйләнә күсәрендә,
Көн һәм төн ҡарашында.
Беҙ мең тапҡыр осрашабыҙ
Көн менән төн (...)һында.
*(Ғәбиҙулла).*

**4.** Күңелең - сүп, баҫһа ығы-зығы.
Күмелә ул юлда йәне сығып.
Минең алда - йәмге һаран,
Йәнгә дауа ҡышҡы (...).
*(Ғәбиҙулла).*

**5.** Һинең кеүек ҡурҡаҡ барға
Һаман меҫкен башҡорт.
Юҡ, юҡ, юҡ! Һин башҡорт түгел -
Торғаны бер (...).
*(Рәмил Ҡол-Дәүләт).*

**6.** Тойҙом, Каспий, тулҡынында
Һаҡмарымдың тамсыларын.
Әйтерһең дә, Урал батыр
Һуҙған бында (...)ларын.
*(Әхмәр Үтәбай).*

**7.** Иҫендәлер: китап аҡ, тиһә, аҡ,
Ҡара, тиһә, ҡара, ти инем.
Бөгөн әллә офоҡ алмаштымы,
Аҙаштымы минең (...)ем?!
*(Рәйес Түләков).*

**8.** Кем уйлаған: әкиәт тип,
Алыҫ Ҡаф тауҙарын.
Әкиәттә ҡалыр тиеп,
Ҡатил (...)лары.
*(Әхмәр Үтәбай).*

**9.** Ишетмәнең, егет, ары саптың,
Ҡай ерҙәргә генә ашыҡтың?
Аты иҫкә төшәме ни юлда
Йәре көткән саҡта (...)тың.
*(Сәрүәр Ғәләүетдинов).*

**10.** Шундай таштар килеп сыға тауҙан,
Тотор-тотмаҫ бара ватылып.
Ҡайҙа икән уның таш исеме,
Ҡайҙа булған унда (...)?
*(Әхмәр Үтәбай).*

**11.** Һин киткәндән нимә була?
Аҫтын өҫкә түңкәрһәк тә,
Был йыһанда әйләнерҙәр
Һаман шул уҡ (...)тәр.
*(Ғәбиҙулла).*

**12.** Аҙ халыҡтың эсенән мин.
Әйтмәгеҙ: "Яҙма, етте!"
Тыныслыҡта ҡаддырһындар
Мине йә (...)те.
*(Ғәбиҙулла).*

**13.** Күтәрелде, күтәрелде,
Ни арала, дуҫҡай, баҡсы.
Монаяты тауҙай булды,
Йыйҙы аҡса, алды (...).
*(Ғәбиҙулла).*

**14.** Төндә мине һис кем күрмәй-белмәй,
Нисек түҙермен һуң көндөҙөн?
Һытылып та китеп һата күрмә,
Мөлдөрәмә тулы и, (...)ем...
*(Рәмил Ҡол-Дәүләт).*

**15.** Бүтән ҡайғы баштан ашҡан саҡта
Нимә генә әле күбәләк?!
Үҙ донъяһын күрмәй бәргеләнә
Күпме хыял, аҡыл, уй, (...)...
*(Ғәбиҙулла).*

**16.** Бойҙай алып ҡаптым, бешкән бойҙай,
Баҫыуынан тыуған яғымдың.
Тамырҙарға һыймай, сикәләргә
Бәрелгәнен тойҙом (...)ымдың...
*(Рәмил Ҡол-Дәүләт).*

**17.** Көндәр алда, өлгөрөрмөн, тинем...
Ах, һемәйҙем, малай, һемәйҙем.
Бер емешен алып ҡабалманым
Үкенескә үткән был (...)ҙең.
*(Рәмил Ҡол-Дәүләт).*

**18.** Ғәжәп ҡаты,
Иҫ китмәле ҡаты,
Ярып ҡара, килһә хәлеңдән,
Бәрә-бәрә дәрт-дарманың бөтөр.
Ҡара тиреҥ сығыр (...)еңдән.
*(Рәмил Ҡол-Дәүләт).*

**19.** Ысын хәҡиҡәттә - әрем тәме!
Кескенәләр ҡайҙа! Кемдәрҙә?
Баланды бит үҙең ҡарар инең,
Ятмаһа шул ағыу (...)дәрҙә.
*(Рәшиҙә Шәмсетдинова).*

**20.** Ғәфү итәм, тиеп, уҡталып та,
Һыйҙыра алмайым һис бер ҡалыпҡа -
Йөрәк аҫтындағы Салауаттарҙы
Һаттың, һылыу, ят бер (...)ҡа.
*(Рәйес Түләков).*

**21.** Әллә инде теге айыу, дейеү
Урлағанмы донъя бәрәкәтен?
Яралғыһыҙ ҡалған ауылымдың
Туҡтар микән бер саҡ (...)е?!
*(Әхмәр Үтәбай).*

**22.** Ыҙалайҙар бауыр баҫа алмай,
Күңелдәре күнмәй тигеҙгә.
Алдаштыра улар үҙ-үҙҙәрен
Һикереп менгән булып (...)гә.
*(Рәйес Түләков).*

**23.** Бер нәмә лә урап үтмәй мине -
Минеке бит бушлыҡ, был һағыш.
Һалҡын өтөп алыр унда һине,
Күңел ҡатҡан, гүйә таш (...).
*(Ғәбиҙулла).*

**24.** Яңғыҙлыҡҡа тарырһың да,
Һорарһың унан кәңәш.
Һин - өсөнсө - артыҡһың, тир
Яңғыҙлыҡ - минең (...).
*(Әхмәр Үтәбай).*

**25.** Башаҡ ыуам. Гүйә олатамдың
Хыялдары тора ыуылып.
Күҙ-ҡарашым уттай балҡыны ла,
Ҡарт имәндәй ҡатты (...)ым.
*(Рәмил Ҡол-Дәүләт).*

**26.** Йырҙарыңды ҡайҙан оттоң, йәнем,
Шишмә һулҡыуҙары - йәнемдә.
Һинең моңоң, минең шатлығым бар
Тәүге умырзая (...)ендә.
*(Фәүзиә Сөләймәнова).*

**27.** Шымартҡандай оҫта аҫыл ташты,
Эшлә, күңел, иртән дә, кис тә.
Көнө-төнө һиңә тынғы бирмәм,
Йәшәүем һәм йәнем - (...)тә.
*(Ғәбиҙулла).*

**28.** Һәм бер таңда ... тертләп уянғанда
Табут кеүек тыныс карапта,
Төрлө яҡлап ярҙар, ярҙар, ярҙар
Шыуа ине минең (...)ҡа.
*(Рәйес Түләков).*

**29.** Уй етеҙ ҙә, йүгерек тә,
Сапмай кейеп нуҡта.
Матурлыҡҡа ҡуйып ҡара,
Ҡуйып ҡара (...).
*(Ғәбиҙулла).*

**30.** Тынмай йән, тынғыһыҙ уйҙар,
Тын түгел бөгөн донъям.
Хистәре ҡайнай күңелдең,
Ҡайнай ер, ҡайнай (...).
*(Рәшит Ғатауллин).*

**31.** Эх, һуғышты туҡтатырға,
Алйып бөттө, йөҙәп...
Шып туҡтар ҙа ине мәхшәр,
Шып туҡтаһа (...).
*(Әхмәр Үтәбай).*

**32.** Таралһам да, һибелһәм дә,
Йомарлап ал усыңа.
Бәлки, ҡайраҡ булырмын, тим,
Бер яугир (...)ына...
*(Рәмил Ҡол-Дәүләт).*

**33.** Яуапһыҙ ҙа ҡалған яман эштәр
Ярһыта бит мине, ярһыта.
Ямандырҙы ауыҙлыҡлар өсөн,
Бармы, заман,
Барымтаң һәм (...)ң?!
*(Рәмил Ҡол-Дәүләт).*

**34.** Көтөп алған автобусым -
Ҡыйыҡһыҙ туҡталышта.
Көттөм һине ел-ямғырҙа,
Буранлы һалҡын (...)та.
*(Рәмил Ҡол-Дәүләт).*

**Илдар ҒӘБИТОВ төҙөнө.**

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



## М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**1 октябрь "Мөхәббәт ҡарағы"** (Ф. Бүләков), музыкаль комедия

**2 октябрь "Ҡоҙаса"** (Б.Бикбай, З.Исмәғилев), музыкаль комедия

**8 октябрь "Эх, күгәрсенкәйҙәрем"** (Ф. Бүләков), мелодрама

## М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**6 октябрҙә** Милли йәштәр театры XXII ижад миҙгелен режиссерҙар Рөстәм Хәкимов һәм Илнур Муллабаев тарафынан әҙерләнгән театрлаштырылған тамаша менән аса. Йыр-моңға, күңелле мажараларға бай тамашала Гөлсөм Бикбулатова, Гөлшат Ғайсина, Венер Камалов, Илнур Лоҡманов һәм театрҙың башҡа артистары сығыш яһаясаҡ. Театр һөйөүселәрҙе көтөп ҡалабыҙ. Башлана 19.00 сәғәттә.

**7 октябрь "Ун өсөнсө йондоҙ"** (В. Ольшанский). Башлана 19.00

## Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**5 октябрь "Йәшлек менән осрашыу"** тип аталған концертта Башҡортостандың атҡаҙанған артисы Мәғәриф Әхмәҙиев сығыш яһай. Концертта Азат Айытҡолов, Гөлсөм Хәбибуллина, Фән Вәлиәхмәтов, Фәнүнә Сиражетдинова, Әлмира Солтанова, Сибәғәт Яруллин, Ридал Фәтхиев, Шамил Хәмәҙинуров, Рәм Гәрәев, Ридик Фәсхетдинов, Фәнир Ғәлимов, Ләйлә Зарипова, Миңләхмәт Ғәйнетдинов, Рәфисә Әсәҙуллина һәм башҡалар ҡатнаша.

**12 октябрь "Осрашыуҙы көттөңмө?"** исемле шоу-программа (режиссеры Сулпан Асҡарова, сценарий авторы - Зөһрә Бураҡаева) менән үҙенең сираттағы миҙгелен аса. Фәдис Ғәниев, Әлфиә Юлсурина, Лилиә Биктимерова, Вәхит Хызыров, Римма Амангилдина, Азамат Тимеров, Искәндәр Ғәзизов, Марсель Ҡотоев, Сәйҙә Ильясова, Заһир Иҫәнсурин башҡарыуындағы йырҙар күркәм тамашаға тағы ла йәм өҫтәйәсәк. Башлана 19.00.

ХОККЕЙ

# "САЛАУАТ ЮЛАЕВ" - ЛИДЕРҘАР ИҪӘБЕНДӘ!

**"Салауат Юлаев" командаһы һуңғы дүрт уйынын Өфөнән алыҫта үткәрҙе. Новосибирскиҙа башланған сәфәр Новокузнецк ҡалаһында тамамланды. Ике еңеү һәм бер еңелеү алып килгән уйындарҙан һуң юлаевсылар кире үҙ майҙанына ҡайтты.**

Алыҫ Көнсығыштың Хабаровск ҡалаһында "Салауат Юлаев" урындағы "Амур" менән ике уйын уҙғарҙы. 23 сентябрҙәге уйын 2:5 иҫәбенә юлаевсыларҙың ышаныслы еңеүе менән тамамланһа, икенсе көндә хужалар 3:1 иҫәбе менән Өфө ҡунаҡтарын еңеүгә өлгәште. Эрик Эрсбергтың йәрәхәттән һуң булыуы, юлаевсыларҙың штраф эскәмйәһенә күпләп "оҙатылыуы", һаҡсыларҙың бар көстәренә уйнамауы - барлыҡ был факттар "Салауат Юлаев"тың еңелеүенә килтерҙе.

Новокузнецк ҡалаһына юлаевсылар бары тик еңеү юллап килеүҙәрен уйын барышында асыҡ иҫбатланы. Иҫәпте хужалар асһа ла, юлаевсылар яуап шайбаһын оҙаҡ көттөрмәне, Олег Сапрыкин һуҡҡан шайбаны "Металлург" ҡапҡасыһы тота алмай ҡалды. Иҫәп асылғандан һуң ҡунаҡтар уйын дилбегәһен тулыһынса үҙ ҡулына алды һәм беренсе осор "Салауат Юлаев" файҙаһына 1:3 менән тамамланды. Артабанғы ике осорҙа Виктор Козлов, Якуб Клепиш һәм Игорь Григоренко иҫәпте 6-ға еткерһә, хужалар Виталий Колесник ҡапҡаһына тағы бер шайба индереү менән генә "хушһынды". Уйын "Салауат Юлаев" иҫәбенә 2:6 менән тамамланды.

Шулай итеп, "Салауат Юлаев" хәҙер 14 мәрәй менән КХЛ-дың Көнсығыш конференцияһында лидерҙар төркөмөндә.

**Юныс ӘХМӘҘИЕВ.**

СМСНАМӘ - ШИҒРИ ӘЙТЕШ

# ИМАНҺЫҘҘАР ТҮРГӘ МЕНҺӘ,

## Үҙ халҡында юҡ ғәме...

**Ҡоробоҙ түңәрәкләнеп, һәр ҡатнашыусының әйткән һүҙҙәре тосая, фекерҙәре үткер була бара. Сәсәндәребеҙ бер-береһенең әйткәненә иғтибар итә башланы. Был йәһәттән был йылы БАТЫР сәсәндең сығышы иғтибарға лайыҡ. ЭТКОЛ сәсән һәр саҡ төртмә теле, сарказмы менән айырыла. Артабан да сәсәндәрҙең үҙ-ара әйтешен, бер-береһенә, ғөмүмән, ҡорға үҙен борсоған һорауҙарҙы биреүен күрге килә. Нимә генә тимәйек, хәҡиҡәт бәхәстә тыуа. Был йылы алдағы һорауға һуңлап килгән яуаптарҙы биреүҙән башлайбыҙ.**



**ЭТКОЛ:**
Һоранығыҙ, яуап бирәм.
Әйт, тиһегеҙ, әйтәйем.
Артынан өйөр эйәртә
Ҡарыҡҡан эт кәнтәйе.
Иманһыҙҙар эт кәнтәйе -
Мин уйлағанды әйтәм.
Уларҙың артынан ҡалмай
Эйәрә боҙоҡ әҙәм.
Иманлылар нинә бойоҡ?
Уйлап ҡара, йә, әле.
Иманһыҙҙар түргә менһә,
Үҙ халҡында юҡ ғәме...

**СУЛПАН:**
Бәлки, аҙашҡанбыҙҙыр ҙа,
Хәйер, уны кем белә?
Был буталсыҡ донъяларҙа
Йәшәүҙән ни мәғәнә?
Әллә ҡайҙа китеп булмаҫ,
Үҙ иленде ташлап та,
Үҙ-үҙеңдән ҡасыуға тиң
Ил ташлау, ахмаҡлыҡ та.
Ләкин юғалып ҡалмайынса,
Сараһын табыу кәрәк.
Беҙгә бер кем ярҙам итмәҫ -
Тырышмаһаҡ әҙерәк.

**ГӨЛКӘЙ:**
Илен һөйөр уландар
Уралдан ҡасты иһә;
Емтек ейер ҡоҙғондар
Йортондо баҫты иһә;
Ут ажғырып аждаһа,
Күктән яу асты иһә;
Мал-мөлкәтен ҡыҙғып,
Юлбаҫар һоҫто иһә;
Йомшаҡ һөйләр юхалар
Иленде ҡосто иһә;
Үлемесле ағыуы
Ерендә боҫто иһә, -
Йәшнәр микән илгенәм?
Йәшәр микән телгенәм?

**БУЛАТ:**
**Иманлының йөҙө бойоҡ...**
**Яңылыша (һың) түгелме?**
**Иманлының йөҙө нурлы,**
**Барған юлы ташлы-ҡырлы.**
**Юлында беҙ иш булайыҡ,**
**Иманһыҙға "теш" булайыҡ.**
**Был ерҙәрҙән ҡасып китер**
**Беҙ бында бер ҡунаҡмы?**
**Иманһыҙҙы шашындырып,**
**Ерҙе биреп ҡуймаҡмы?**

**БАТЫР:**
Тотабыҙ ҙа ҡарайбыҙ шул
Күршенең баҡсаһына.
Булат сәсән тороп торһон,
Ырыҫҡа яуап бына:
Америка, Ауропаны
Өлгө итеп алмайыҡ.
Үҙ юлдары бар уларҙың -
Беҙ үҙ юлда булайыҡ.
Йәшәү рәтен инде күптән
Бәйгәмбәребеҙ әйткән.
Ә бит Аллаһ уны беҙгә
Иң күркәм өлгө иткән.

**ЭТКОЛ:**
Беҙ ҙә китербеҙ байып,
Донъя бит ул ҡуласа...
Әбйәлилдәр Магниткаға
Ер һатып күңел аса.
Хәйбулла, Сибай маҡтана:
"Беҙҙә табыла баҡыр..."
Баҡырына кемдәр хужа?
Юҡҡа маһая, бахыр.
Белореттар ҙа ҡалышмай:
"Беҙҙә, ти, иң-иң бейек тау..."
Тауға юлын ябылған,
Һинә түгел Ямантау.
Бөрйәндәр:"Беҙҙең Шүлгән",-ти.
Шүлгән юҡ, бар Капова.
Ағиҙелгә, Баҙал тауға
Хәҙер хужа Мәскәү...

**МӘҘИНӘ:**
Барыбыҙҙы бер сыбыҡтан
Ҡыуып ташлаМаҒыҙсы?
Өлгөлө лә ғаиләләрҙе
Кәмләп-хурламағыҙсы?
Колхоз-совхоз бөттө, тиеп,
Ҡул ҡаушырып ятмайбыҙ.
Иген игеп, һыйыр һауып,
Көндәр итеп ятабыҙ.
Өй түремдә нурлы бишек -
Ваҡыт та юҡ ғәйбәткә.
Инмәй ерҙе һатыуҙар
Ете ятып, бер төшкә.

**ЫРЫҪ:**
Ер кемдеке? Иманһыҙҙар
Хужа була аламы?
Ғәмһеҙ булһаң, йоҡлап ятһаң,
Ҡорҙаш, ерһеҙ ҡалаһың!
Ата-бабам был ер өсөн
Йәнен һалған, ҡан ҡойған.
Хәҙер килеп, халыҡ ере
Ҡалһынмы иманһыҙға?
Балалар, ейәндәребеҙ
Ҡаса Себер һаҙына,-
Шаҡ ҡатыр бит, ай, Башҡорт хан,
Ҡараһаҡал, Салауат!
Туймаҡ тамаҡты шаштырып,
Ятмабыҙ йоҡомһорап!
Дәррәү сыҡырбыҙ майҙанға,
Бар бит беҙҙең хоҡуҡтар.
Кәмемәне, арттыр илдә
Уралдар, Салауаттар!
Ҡурҡып ятып, хур булмайыҡ -
Берҙәмдәр яу ҡайтарған.
Халыҡ һүҙе енеп сыға -
Донъя шулай ҡоролған.
Һуҡыр сыҫҡан да аҙашмай,
Күҙ-ҡолаҡ урынында.
Аҙашҡанға - навигатор,
Алға атлайыҡ, мырҙа!
Тик алға атлаған саҡта
Арҡаң алда булмаһын.
Алға ҡарап атла, ҡорҙаш,
Артҡа ҡарап туймаһын.
Европала торабыҙ ҙа,
Бәйләнештәр һуҙабыҙ.
Донъя менән бергә атлау
Шул фарыҙдыр, туғаным!

**КӨФӨ:**
**Европалар - прагматиктар,**
**Азиялар - тойғоло.**
**Европаса йәшәһәк бит,**
**Хис-моңобоҙ юйылыр ҙа,**
**Рух-тойғобоҙ юғалыр.**
**Ризамын: артҡа ҡарап ҡына**
**Алға бара алмайбыҙ.**
**Артҡа ҡарамай ҙа булмай,**
**Тарихыбыҙ ҡандай бит.**
**Әйтегеҙсе, дуҫҡайҙарым,**
**Ҡайҙа беҙҙең юлыбыҙ?**
**Ҡайҙан китһәк, туңырбыҙ ҙа,**
**Ҡайҙан китһәк - уңырбыҙ?**

**ШУЛАЙ ИТЕП...**
**Сәсәндәр әйтеше дауам итә. Иҫегеҙгә төшөрәбеҙ: конкурска йомғаҡ Яңы йыл алдынан яһаласаҡ. Еңеүсене кеҫә телефоны көтә. СМС өсөн телефон: 8-917-477-09-74.**

## ҠОТЛАЙБЫҘ!

Сентябрь айында тыуған көндәрен билдәләүсе уҡыусыларыбыҙҙы - **Ҡырмыҫҡалы районы** Яңы Ҡыйышҡы ауылынан Әлиә Әбдрәшитованы, **Стәрлебаш районы** Үрге Шәкәр ауылынан Айгөл Мәһәҙиеваны, Ибраҡай ауылынан Ринат Ғәлиевты, Стәрлебаш ауылынан Гөлсинә Хафизованы, **Йәрмәкәй районы** Йәрмәкәй ауылынан Гүзәл Әхмәҙиеваны, Рәтамаҡ ауылынан Гөлсөм Вәлиәхмәтованы, **Ейәнсура районы** Исәнғол ауылынан Наил Йәғәфәровты, Әнисә Таныҡҡужинаны, Радик Мырҙабулатовты, Ибрай ауылынан Гөлдәр Аҡбутинаны, **Илеш районы** Ләяшты ауылынан Мәүлиҙә Шакированы, **Өфө ҡалаһынан** Мөхмүзә Ғәйнуллинаны, Лилиә Мөхәмәтдиновалны, Тәлиғә Сәғитованы, **Бөрйән районы** Иҫке Собханғол ауылынан Әлиә Хәлитованы, Рәмилә Юлсуринаны, **Дәүләкән районы** Сапай ауылынан Миңлегөл Лотфрахманованы, **Мәләүез ҡалаһынан** Роза Хазиеваны һәм башҡа уҡыусыларыбыҙҙы ихлас күңелдән ҡотлайбыҙ! Күңел тыныслығы бер ҡасан да ташламаһын, сәләмәтлек һәм бәхет алдағы көндәргә лә тоғро юлдашығыҙ булһын!

**Иң изге теләктәр менән, "Киске Өфө"ләр.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ҠУНАҒЫН ЯРАТМАҺА...

## хужа бесәйен әрләр

Бер генә ваҡиға ла беҙҙә өр-яңы кешене уятыуы мөмкин. Йәшәү, тимәк, һәр көндө яңынан тыуыу.

**(Антуан де Сент-Экзюпери).**

Беҙ булмаған урында яҡшы. Үткән тормошта беҙ юҡ, шуға ла ул беҙгә иң яҡшыһы булып тойола.

**(Антон Чехов).**

Бөтә донъя - театр. Ундағы ирҙәр ҙә, ҡыҙ-ҡатындар ҙа - актерҙар. Уларҙың һәр береһе йә сәхнәгә килеп сыға, йә сәхнәнән сығып китә. Һәр береһе төрлө роль уйнай...

**(Вильям Шекспир).**

Йәшәүҙең ҡәҙерен белмәгәндәр йәшәүгә лайыҡлы ла түгел.

**(Леонардо да Винчи).**

Һәр кем үҙ тормошонда осратырға тейешле кешеһен осрата.

**(Натан Эйдельман).**

**Тағы бер аҡыл: "Кеше иң күп эшләгән гонаһ ниндәй?" тип һораған уҡыусылары Уҡытыусынан. - Кешеләр эшләгән иң киң таралған гонаһ - ул уларҙың үҙ-үҙенә хыянат итеүе, - тип яуаплаған Уҡытыусы. - Кешеләр быны меңәрләгән ысул менән тормошҡа ашыра. Улар үҙҙәренән үҙҙәре баш тарта һәм башҡалар тарафынан йотола. Был нисек шулай килеп сыға һуң? Кешеләр һәр ваҡыт ҡөсләрәк, аҡыллыраҡ, ҡеүәтлерәк, тип кемделер алға сығара. Улар һәр ваҡыт ниндәйҙер абруйға Аллаға табынған кеүек табына, уның һәр һүҙен ысынбарлыҡ итеп ҡабул итә. Улар шулай үҙҙәренә кумир уйлап сығара ла, уларҙың аяғына йығыла. Улар ниндәйҙер сәйәси система, йәмәғәт ойошмалары төҙөй һәм уларға тоғро хеҙмәт итә. Улар сит идея өсөн һуғышырға, көрәшергә әҙер тора. Улар шулай итеп үҙҙәрен үлемгә ебәргән кеше уңышлыраҡ,байыраҡ йәшәһен өсөн ғүмерҙәрен бирергә лә әҙер тора. Ә бит меңәрләгән кешене үҙенә табындырған, төрлө көрәш һәм һуғыштарҙы уйлап сығарғандар ике маҡсатты ғына күҙ уңында тота: аҡса һәм власть. Бындай хыянаттың ҡурҡыныс шунда: үҙ-үҙенән баш тартҡан, үҙлеген ситкә ташлаған кеше шул тиклем алыҫ китеп өлгөрә, хатта әйләнеп ҡайтыу мөмкин булмай...**
**Һеҙ ҙә, уҡыусыларым, башҡалар кеүек, ҡасандыр сит әләм аҙымы хәрәкәт иттегеҙ. Әле бына үҙлегегеҙгә яңынан әйләнеп ҡайтыу юлындағыһыҙ. Үҙлегегеҙгә әйләнеп ҡайтҡас, башҡаларға ла үҙ-үҙҙәренә ҡайтырға ярҙам итегеҙ. Һәр гөл үҙ сәскәһен атырға , үҙенең генә хуш еҫен таратырға тейеш...**
**Ошо һүҙҙәрҙән һуң Уҡытыусы доға ҡылырға ултыра. Уҡыусылары уның ошо һүҙҙәрен генә ишетә: "Бар гөлдәр ҙә сәскә атһын берүк..."**

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мирасты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттен Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир: **Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:** Әхмәр ҮТӘБАЙ, Ләйсән НАФИҠОВА, Зәйтүнә ӘЙЛЕ, Таһир ИШКИНИН, Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА, Артур БАТЫРШИН.

Беҙҙең адрес: **450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru** **kiskeufa@ufacom.ru**
«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**
**Баш мөхәррир** 253-25-44
**Баш мөхәррир урынбаҫары** 246-03-24
**Бухгалтерия** 246-03-23
**Хәбәрселәр** 252-39-99
Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 30 сентябрь 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44, 246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.
«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**
Тиражы - 5203
Заказ 3869